ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 декабрь (аҡъюлай) 2023

№50 (1092)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға 857 һум 04 тингә 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Уттың ялы ла...**

ҡойороғо ла юҡ





6

**Оҙон көйҙәребеҙ арияға тиң...**



8-9

**Илһөйәрлек рухын...**

кинолар ҙа тәрбиәләй



11

**Инәйҙәр бирсәткә бәйләй...**



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*АФАРИН!*

## ҮӘТ, ЗАМАНА ЕГЕТТӘРЕ!

**Өфөнән KurAI (Ҡурай) программистар командаһы Up Great Милли технологик башланғыстарҙың "Ашығыс эҙләү" конкурсында еңеү яуланы һәм 100 млн һум аҡсалата бүләк алды. Йәштәр юғалған кешеләрҙе тиҙ арала эҙләп табыу системаһын уйлап сығарған һәм эшләгән. Командала - Башҡортостан вуздарын тамамлаған Сәлим Байгилдин, Илназ Фәтҡуллин һәм Тимур Иҙрисов.**




"ЛизаАлерт" эҙләү-ҡотҡарыу отрядына юғалған кешеләрҙе эҙләшеү буйынса йыл һайын 40 мең ғариза килә һәм "Ашығыс эҙләү" конкурсы был эштә ярҙам итеү маҡсатында ойошторола. Ярыш өс этаптан торған. Унда Рәсәйҙең 45 төбәгенән барлығы 267 команда ҡатнашҡан, шуларҙың 12-һе финалға үткән. KurAI командаһы технологик ҡатмарлыҡтарҙы 27 минутта тулыһынса үтеп сыға алған. "Үҙебеҙҙең нейросеть ярҙамында урман һыҙатында йәшеренгән 18 кешенең 16-һын табып (был 89 процент), технологик ҡаршылыҡтарҙы үтә алған берҙән-бер команда булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, өлгәшелгәндәрҙә туҡтап ҡалмаҫҡа һәм һөҙөмтәлелекте йөҙ процентҡа тиклем күтәрергә ниәтләйбеҙ", - ти KurAI командаһының капитаны Сәлим Байгилдин.

Һынауҙарҙы үткәндән һуң еңеүсе команда ағзалары "ЛизаАлерт" эҙләү-ҡотҡарыу ирекле отряды сафтарына баҫҡан һәм юғалған кешеләрҙе эҙләү эшенә йәлеп ителгәндәр. Йәштәр ирекмәндәр һәм эҙләү хеҙмәттәре хеҙмәткәрҙәренә конкурс сиктәрендә уйлап табылған техник сиселеште артабан ҡулланыуы уңайлы булһын өсөн графикалы интерфейс булдырған.

**Әйткәндәй, егеттәрҙең икәүһе - Илназ Фәтҡуллин һәм Тимур Иҙрисов Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында, Сәлим Байгилдин Республика Башҡорт лицей интернатында уҡыған.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ЭСКЕЛЕК СИКЛӘНӘ

**Рәсәй Федерацияһының Дәүләт Думаһы "Этил спиртын, алкоголле һәм спиртлы продукция етештереүҙе һәм уның әйләнешен дәүләт көйләүе һәм алкоголле продукцияны ҡулланыуҙы сикләү тураһында"ғы федераль законға үҙгәрештәр индерҙе.**

Закон көсөнә ингән хәлдә Рәсәй субъекттары ошондай яңы вәкәләттәргә эйә буласаҡ: күп фатирлы өйҙәрҙә һәм (йәки) улар эргәһендәге территорияла йәмәғәт туҡланыуы хеҙмәттәре күрһәткәндә алкоголле продукцияны ваҡлап һатыу ваҡытын сикләү; йәмәғәт туҡланыуы объекттарында, шул иҫәптән күп фатирлы өйҙәрҙә һәм (йәки) улар эргәһендәге территорияла һыра һәм һыралы эсемлектәр, сидр, пуаре, әсе бал һатыуҙы тыйыу; йәмәғәт туҡланыуы хеҙмәттәрен күрһәткән ресторандарҙа, барҙарҙа, кафеларҙа, буфеттарҙа һыра һәм һыралы эсемлектәрҙе, сидрҙы, пуарене, әсе балды ваҡлап һатыуға ҡарата талаптар ҡуйыу.

Ошо законға ярашлы, РФ ҡануниәте тарафынан ҡаралмаған осраҡтарҙа ҡулланыусыларға этил спирты өҫтәлгән алкоголле продукция етештереү, алкоголле продукция атамаһында уның нимәнән етештерелгәне, составы, шифалы сифаттары һ.б. хаҡындағы дөрөҫ булмаған мәғлүмәттәр биреү тыйыла. Һүҙ барған законға үрҙә күрһәтелгән үҙгәрештәр индереүгә граждандарҙың күп фатирлы өйҙәрҙә урынлашҡан барҙарҙа төндәрен араҡы һәм һыра һатыу арҡаһында күп уңайһыҙлыҡтарға дусар булыуы хаҡындағы күп һанлы шикәйәттәре нигеҙ булды. Башҡортостан Республикаһының 2021 йылдың 20 декабрендә ҡабул ителгән N491-з һанлы законына ярашлы, күп фатирлы өйҙәрҙә һәм (йәки) улар эргәһендәге территорияла алкоголле эсемлектәрҙе ваҡлап һатыу майҙаны 25 кв. метрҙан кәм булмаған айырым зал булған хәлдә генә рөхсәт ителеүе хаҡында граждандарҙың иҫенә төшөрәбеҙ.

Хәҙер Башҡортостандың власть органдары алкоголле һәм спиртлы продукция әйләнешен көйләү буйынса барса вәкәләттәргә эйә, шул иҫәптән улар әле атап кителгән осраҡтарҙа барҙарҙың, кафе һәм ресторандарҙың хеҙмәт күрһәтеү ваҡытын аныҡ билдәләй һәм айырым тораҡ пункттарҙа уны һатыуҙы тулыһынса тыя ала.

**Зариф БАЙҒУСҠАРОВ,**
**РФ Дәүләт Думаһы депутаты.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

## ӨЛӨШ ИНДЕРӘЙЕК!

**Беҙҙең Өфөбөҙ ниндәй миҙгелдә лә матур. Киң урамдары, матур парктары, бейек йорттары, тарихи үҙәк һәм яңы райондар - барыһы ла өфөләрҙең күңеленә яҡын.**

Баш ҡаланың таҙа һәм күркәм булыуына күп ойошмалар һәм кешеләр үҙ көсөн һала. Әле бына ҡарҙар яуып, бер аҙ буранлап, беҙ өйрәнгән һәм яратҡан ап-аҡ ҡыш башланды. Һәм беләһегеҙме күҙгә нимә салына? Ҡала башлығының да, Өфө районы етәкселәренең дә ошо эш-мәкәрлектең уртаһында булыуы, бергә ҡайнауы. Улар эш барышын контролдә генә тотмай, ә үҙҙәре лә ҡулдарына көрәк алып, ҡар көрәй. Етәкселәрҙең халыҡҡа яҡын булыуы яҡшы күренеш. Әлбиттә, эш күп, бәлки, ҡарап еткерелмәгән урындар ҙа барҙыр, ләкин әүҙем эш алып барылыуы, уларҙың бәйләнештә булыуы үҙе үк мәртәбә.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

**✓ Борис Ельцин бына ниҙәр әйткәйне: "Беҙ Башҡортостан халыҡтарына әйтәбеҙ, беҙ Башҡортостандың Юғары Советына, Хөкүмәтенә әйтәбеҙ: үҙегеҙ йота алған тиклем власть өлөшөн алығыҙ..."**

*БАЙРАМ УҢАЙЫНАН*

# ДӘҮЛӘТЕБЕҘҘЕҢ ТАРИХИ САҒЫЛЫШЫ




**Декабрь айында Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың яңы Конституцияларын ҡабул итеүгә 30 йыл тулды. Дәүләт ҡоролошоноң төп принциптарын һәм ҡанундарын билдәләп, кеше һәм граждан хоҡуҡтарын ғәмәлгә ашырыуҙың төп ҡануни нигеҙе булараҡ, Конституцияның йәшәйешебеҙҙәге әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.**

Рәсәй составындағы милли республика (дәүләт) булараҡ, Башҡортостандың конституцион үҫешенең үҙ тарихы бар. Республикабыҙҙың яңыртылған дәүләтселек нигеҙҙәре XX быуат башындағы Рәсәй инҡилабы барышында ерле мөхтәриәт (автономия) өсөн көрәш һөҙөмтәһендә булдырыла. Әйткәндәй, "автономия" һүҙе грек телендә "үҙ ҡануниәтлелек" булыуҙы, йәғни үҙ ҡанундары булған дәүләт мәғәнәһен аңлата.

1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостандың ерле автономияһы иғлан ителгәндән һуң башҡорт ҡоролтайҙарында конституцион әһәмиәткә эйә булған яңы хоҡуҡи акттар ҡабул ителә башлай. Башҡортостандың беренсе Конституцияһы проекты 1920 йылда уҡ әҙер була. Башревкомдың 1920 йылдың 9 апрелендәге ултырышында Конституция комиссияһы булдырыла, ә тәүге проект бик күләмле булып (12 бүлек, 235 статья), республика тормошон һәр яҡлап көйләүҙе күҙаллай. Тәүге Башҡорт хөкүмәте эшмәкәрлеген туҡтатҡас, 1921 йылдың 29 апрелендә БашЦИК Президиумы ултырышында конституция мәсьәләһе яңынан ҡуҙғатылып, яңы комиссия ағзалары тәғәйенләнә. Әммә был ваҡытта автономияларға үҙ конституцияһын булдырыу хоҡуғы бирелмәгән була, һәм эш туҡталып ҡала.

РСФСР-ҙың 1925 йылда ҡабул ителгән Конституцияһы автономиялы республикаларға үҙ конституцияларын булдырыу мөмкинлеген бирә. Башҡорт ССР-ының тәүге Конституцияһы 1925 йылдың 27 мартында Советтарҙың V Бөтә башҡорт съезы тарафынан раҫлана. Конституция 4 өлөштән, 8 бүлектән тороп, унда барлығы 93 статья була. Конституцияның төҙөлөшө түбәндәгесә була: I. Дөйөм положениелар; II. Башҡорт Социалистик Совет Республикаһының РСФСР һәм СССР менән закондар сығарыу һәм идара итеү өлкәһендәге мөнәсәбәттәре; III. БССР-ҙың бюджет хоҡуҡтары; IV. БССР-ҙа Советтарҙың Бөтә башҡорт съезы вәкәләттәре предметы тураһында; V. БССР-ҙа Совет власының төҙөлөшө тураһында; VI. Урындағы власть тураһында; VII. Һайлау хоҡуҡтары; VIII. БССР-ҙың гербы, флагы һәм хөкүмәтенең урынлашыуы тураһында.

Был Конституция раҫлау өсөн ВЦИК-ка ебәрелә, әммә үҙәк власть уны раҫлауҙан баш тарта. Конституцияның 1-се статьяһында "Башҡортостан РСФСР составына ирекле инеүсе һәм унын аша Совет Социалистик Республикалар Союзы менән берләшеүсе республика булып тора" тип яҙылыуын ВЦИК комиссияһы инҡар итә. Ошо комиссияның йомғаҡлау белешмәһендә "Рәсәй Федерацияһы айырым республикаларҙың ирекле килешеүе нигеҙендә түгел, ә РСФСР юғары органдары раҫлауы менән Рәсәй республикаһы составындағы айырым милләттәрҙе автономиялы республикаларға айырыу принцибында төҙөлә", тип белдерелә. Был хәл Ленндың 1920 йылда уҡ Әхмәтзәки Вәлидигә "Башҡортостан менән төҙөлгән Килешеү - бары бер ҡағыҙ киҫәге генә", тип әйтеүенә бер тамсылай оҡшаған була.

1937 йылда Советтарҙың X Бөтә башҡорт съезында ҡабул ителгән Башҡорт АССР-ы Конституцияһы ла ВЦИК тарафынан 1940 йылға тиклем раҫланмай, шуға күрә республикабыҙҙың Төп законы ғәмәлдә булмай, тип әйтергә була. Әлбиттә, был осорҙа Башҡортостандың үтә сикләнгән дәүләтселеге бары Рәсәй һәм СССР Конституциялары һәм ҡанундары нигеҙендә ғәмәлгә ашырыла. Сталин һәм ВКП(б) диктатураһы йылдарында конституцион законлылыҡтың декларатив форма ролен үтәп, сит дәүләттәр алдында бер ширма булыуын да оноторға ярамай.

Рәсәйҙең власть системаһы ваҡыты-ваҡыты менән билдәле бер үҙгәрештәр кисерә, ил менән идара итеүҙә демократлаштырыу осорҙары ла булып ала, хатта ил Президенты үҙе үк милли республикаларға үҙаллылыҡты, хатта суверенлыҡты вәғәҙә иткән мәлдәргә үҙебеҙ шаһит булдыҡ.

1993 йылда яңы Рәсәйҙә ғәмәлгә ашырылған конституцион реформаның билдәле бер сәйәси сәбәптәре булды, ул СССР Президенты Михаил Горбачевтың үҙгәртеп ҡороу сәйәсәтенең уңышһыҙлыҡҡа осрауы менән бермә-бер бәйле булды. Советтар Союзы тиғән бөйөк держава билдәле бер амбициялы сәйәсмәндәр араһында аңлашмаусанлыҡ барлыҡҡа килеп, ҡотолғоһоҙ тарҡалыу юлына сыҡҡайны. Рәсәйҙә бер үк ваҡытта Президент һайлау кампанияһы башланып киткәс, РФСР Юғары Советы Рәйесе Б.Н. Ельцин милли республикаларға мөмкин булғанса үҙаллы йәшәү, йәғни суверенлы булыуҙы тәҡдим итә. Борис Ельцин, халыҡҡа мөрәжәғәт итеп, бына ниҙәр әйткәйне: "Беҙ Башҡортостан халыҡтарына әйтәбеҙ, беҙ Башҡортостандың Юғары Советына, Хөкүмәтенә әйтәбеҙ: үҙегеҙ йота алған тиклем власть өлөшөн алығыҙ... Әгәр һеҙ Башҡортостандың ер аҫты ла, байлыҡтары ла, ерҙәре лә - былар Башҡортостан халыҡтары мөлкәте, тип ҡарар итһәгеҙ, тимәк, ул шулай буласаҡ... Башҡортостандың нефте һәм газы уныҡы, тик ул ғына үҙенең байлыҡтары менән тотонорға хоҡуҡлы... Әгәр Башҡортостан үҙенең суверенитеты хаҡында иғлан итһә, беҙ был суверенитетты хөрмәт итәсәкбеҙ". Һис шикһеҙ, бындай сәйәси аҙымдар Рәсәй дәүләтенең берҙәмлеген һаҡлау һәм тотороҡло ҡалыуын тәьмин итеү өсөн уңайлы шарттар тыуҙырҙы.

Әлбиттә, сәйәси һәм иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ хөкөм һөргән 90-сы йылдарҙа Рәсәй етәкселегенең ул саҡтағы эске сәйәсәте СССР ваҡытынан ҡалған дөйөм мөлкәтте ахырынаса исраф итеп бөтөрөүгә юл ҡуйманы, был ҡағиҙә иң беренсе милли республикалар өсөн үтә мөһим булды. Әлбиттә, күптән иғлан ителгән баҙар иҡтисады һәм үҙгәртелгән сәйәси ҡоролош яңыртылған Конституцияға нигеҙләнергә тейеш була. Һәм тап шул маҡсаттарҙа оло Рәсәй иленең дә, Башҡортостан Республикаһының да яңы Конституциялары ҡабул ителә. Беҙ әле лә үҙгәрештәр тамамланмаған, ауыр сәйәси ситуациялар тыуып торған осорҙа йәшәйбеҙ. Ошо сәбәптәр арҡаһында Төп законға ла үҙгәрештәр индерелеп тора. Әммә Башҡортостан халыҡтары өсөн йәшәгән ил-йортобоҙҙоң дәүләтселеге, уның республика статусы булыуы мөһим, ә был тап Конституция тип аталған төп дәүләт документыбыҙға асыҡтарҙан-асыҡ, аныҡтарҙан-аныҡ итеп теркәлеп ҡуйылған. Киләсәк быуындарыбыҙға Конституция көнөнөң 50 йыллығын ғына түгел, бер быуатлыҡ тарихын да шатланып билдәләргә яҙһын, тим.

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

## ӨЛӨШ ИНДЕРӘЙЕК!

**(Башы 1-се биттә).**

Шуны әйткем килә, интернет киңлектәрендә "Юлды таҙалағандан һуң парковкаға инеп булмай, ҡар һалынған", "Йорт ихатаһын насар таҙалағандар" һәм башҡа ризаһыҙлыҡ белдергән яҙыуҙар бар. Оло юлдағы ҡарҙы һөрөп үткәндән һуң юл ситенә бер аҙ өйөлөп ҡалған ҡарҙы үҙегеҙгә көрәп сығыуы 10 минут ваҡытты ала бит һуң. Оҙон итеп интернетта хәбәр яҙып ултырған ваҡытты файҙалы эшкә тотоноуығыҙ мең артыҡ.

Йорт ихаталарының насар таҙаланыуында, башлыса, шәхси машиналарын алмаған водителдәр ғәйепле, тип әйтер инем. Таҙартыу эштәре буласағы тураһындағы иғландарҙы күҙҙәренә лә элмәйенсә, ярты сәғәткә машиналарын алып тораһы урынға, балкон тәҙрәһе аша ҡарап, ризаһыҙлыҡ белдереп тороусыларҙы аңламайым. Мин үҙем һәр саҡ был йәһәттән бик уяумын, башҡаларға ла ошоно кәңәш итәм.

Мин үҙем "Яркий" биҫтәһендә йәшәүсе булараҡ, юлдарҙы төҙөкләндереүҙәрен бик шатланып күҙәттем. Шулай уҡ быйыл велосипедта йөрөргә яратыусылар өсөн махсус юл төҙөнөләр, яҡтылыҡ ҡуйҙылар. Уңайлы булып ҡалды. Шулай уҡ, белеүемсә, быйыл тышҡы яҡтыртыу бағаналары Максимовка, Шакша, Кенәз, 8 март ҡасабаһында ла ҡуйылған.

Балаларға матур тәьҫораттар бүләк итеү - ололарҙың бурысы. Шуға күрә ҡалала балалар өсөн эшләгән төрлө ойошмаларҙың күп булыуы ҡыуандыра. Оҙаҡламай Балалар театры ла төҙөлөш эштәренән һуң бәләкәстәргә үҙ ишектәрен асасаҡ. Был минуттарҙы балалар менән бергә хатта ололар ҙа түҙемһеҙләнеп көтә, буғай. Мин бала саҡта театр алдында матур майҙансыҡ була торған ине, һуңынан ул юҡ ителде. Хәҙер тағы ла ошондай майҙансыҡтың эшләнеүенә ҡыуанам, сөнки театрҙан ҙур тәьҫораттар менән сыҡҡан балаларҙы тышта ла матур күренеш ҡаршы алһа, бик тә яҡшы буласаҡ.

Һуңғы ваҡытта туризмды үҫтереүгә ҙур иғтибар бүленә. Төрлө арт-объекттар асыла, мәғлүмәти стендтар булдырыла. Мәҫәлән, Каруанһарай, Дуҫлыҡ монументы янында, Аксаков паркында һәм башҡа урындарҙа ҡуйылған мәғлүмәти стендтар, "Башҡорт сәйе" арт-объекты, төрлө фото төшөү урындары, башҡорт орнаментлы эскәмйәләр - барыһы ла ҡалаға килгән туристар өсөн файҙалы һәм кәрәкле. Ғөмүмән, баш ҡалабыҙ көндән-көн ҙурая, матурая. Ошо матурлыҡтың ҡәҙерен белеп, уны тағы ла күркәмерәк итеү өсөн үҙебеҙ ҙә өлөш индереп йәшәйек, дуҫтар.

**Зифа ЙЫҺАНБИРҘИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Уҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус йоҡтороуҙың 191 яңы осрағы асыҡланған. Хәбәр ителеүенсә, бөгөнгө көндә республикала 183 пациент, шул иҫәптән 94 оло йәштәге кеше стационарҙа дауалана. Ә 2418 ауырыу өй шарттарында мәкерле сиргә ҡаршы көрәшә, шуларҙың 1089-ы - 60 йәште үткән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Сибайҙа махсус хәрби операцияла һәләк булған Илнар Хәтмуллиндың ғаиләһе менән осрашты. Илнар 2022 йылдың 26 сентябренән мобилизацияланған, алғы һыҙыҡта хеҙмәт иткән. 30 июндә Тыуған иле өсөн батырҙарса һәләк булған. Үлгәндән һуң Батырлыҡ ордены һәм генерал Шайморатов ордены менән бүләкләнгән. Радий Хәбиров геройҙың әсәһе Лариса Хәтмуллинаға ҡыйыу, һәләтле, илһөйәр ул тәрбиәләгәне өсөн рәхмәт белдерҙе.

✓Дәүләт башлығы "Владимир Путин менән йыл йомғаҡтары" программаһында хәбәр итеүенсә, илдә уртаса ғүмер оҙайлығының йылдам үҫеше күҙәтелә. Әйтәйек, әгәр 2021 йылда ул 70 йәштән күберәк булһа, быltыр - 72,73 йәш, 2023 йылда - 74 йәш."Ошондай мөһим социаль күрһәткестә дәүләттең иҡтисад өлкәһендә лә, социаль сәйәсәт өлкәһендә лә көс һалыуы асыҡ сағыла", - тип белдерҙе Владимир Путин.

✓Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығында яңы йыл байрамдарында республикала алкоголь һатыуҙы сикләү тураһында белдерҙеләр. "3, 4 һәм 5 ғинуарҙа - киске сәғәт 5-тән иртәнге 10-ға, 6 ғинуарҙа киске 5-тән төнгө 11-гә тиклем магазиндарҙа алкоголь һатыу тыйыла", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Башҡортостан Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығында. Шулай итеп, сикләү дүрт көн ғәмәлдә, был магазиндарҙа һатыуға ғына ҡағыла.

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Азат Бадранов өсөнсө тапҡыр атай булған. Уның ҡыҙы тыуған. Әйткәндәй, махсус хәрби операция зонаһында Азат Шамил улының позывнойы - "13". Тап 13 декабрҙә уның балаһы донъяға килгән. Ҡыҫҡа ваҡытлы ялған ҡайтҡан Азат Бадранов ҡыҙы менән ҡатынын бала табыу йортонан үҙе ҡаршы алған.

✔ ***Грипп таралыу сәбәпле табиптар кеше күп урындарҙан ситтәрәк йөрөргә, битлек кейергә, ә өйҙә иһә витаминдар, иммунитетты нығытыусы, вирусҡа ҡаршы үлән сәйҙәре эсергә кәңәш бирә.***



БЫНАҒАЙЫШ!

**Беҙҙең халыҡтың ҡыйыулығына һоҡланырғамы, аптырарғамы - белмәйем. Һоҡтан күҙ тейеүе ихтимал, шуға күрә һоҡланмай ғына күпселектең иммунитет көсөнә шатланырға ғына кәрәктер был көндәрҙә. Ни өсөн тигәндә, һаулығы шәп кешеләр былтырғы тажвәхмәт менән грипп осоронда уҡ йәмәғәт транспортында ла, магазин-баҙарҙарҙа ла бышҡырып-сөскөргән хәлдәрендә лә битлекһеҙ-ниһеҙ, иркен йөрөргә өйрәнде.**

# ХАҠТАРҒА СИК БУЛЫРМЫ?



Уларға артабан да шундай ҡорос һаулыҡ теләп, һүҙҙе себен теймәй сер итеп барыусы сирләшкә кешеләр хәленә йүнәлтәйек, булмаһа, сөнки көҙгө-ҡышҡы миҙгел башланыр-башланмаҫтан, инфекция хроник ауырыулы ошо сирләшкәләрҙе аяҡтан йыға. Ошоға тиклем әллә ни һиҙелмәһә лә, Роспотребнадзор белдереүенсә, 9 декабргә быйыл төүге таптҡыр Рәсәйҙә гриптың АН3N2 штамлы Гонконг төрө COVID-19 менән берләшеп, һөжүмгә күсмәксе. Был, әлбиттә, ауырыуҙар һанының бермә-бер артыуына килтереүе ихтимал, тип фаразлай табиптар. Әлеге көнгә ил буйынса ОРВИ менән сирләүселәр миллиондан ашты, шул уҡ ваҡытта тажвәхмәт тә аҫтыртын ғына үҙ эшен башҡара тора, сөнки ул хәҙер "еңелсә" битлеге аҫтына йәшеренде һәм сир билдәләрен кеше аяғөҫтө үткәргәнлектән, ҡатмарлашыуҙар башланыуы мөмкин. Ковидтың мәкерлеге лә тап шунда: ныҡлап дауаланмаған осраҡта һунынан кеше организмында ҡан ҡуйырыу, тромбоз, йөрәк-ҡан тамырҙары сире, диабет башланыуы ихтимал.

Шулай итеп, грипп менән ковид "тандемына" ҡыҙылса менән коклюш, пневмония ла килеп өҫтәлгән икән. Белоретта ҡыҙылса сиренең "тоҡанып" китеүе хаҡында яҙып сыҡҡайнылар инде. Рәсәйҙә, шул иҫәптән, Башҡортостанда ла, грипп таралыу сәбәпле, табиптар барыбер ҙә һаҡланыу саралары күрергә: кеше күп урындарҙан, шулай уҡ йүткереүсе, сөскөрөүсе кешеләрҙән ситтәрәк йөрөргә, битлек кейергә, ә өйҙә иһә витаминдар, иммунитетты нығытыусы, вирусҡа ҡаршы үлән сәйҙәре эсергә кәңәш бирә. Ошо уңайҙан социаль селтәрҙәрҙә белгәнебелмәгәне лә төрлө кәңәштәре менән әүҙемләшеп китте, ләкин халыҡ араһында популяр бал, һарымһаҡ, лимон кеүек сараларҙың грипты дауалауҙа әллә ни һөҙөмтә бирмәүе асыҡланды. Бер нисә халыҡ табибының шулай ҙа вирусҡа ҡаршы әүземлеге менән айырылып тороусы чага - ҡайын бәшмәге төнәтмәһе, шулай уҡ врачтар тарафынан хупланған селен, цинк, Д3 витамины ҡулланыу кеүек кәңәштәр популярлыҡ яуланы.

Был элементтарҙың иммунитетты нығытыусы үҙенсәлектәрен хәҙер рәсми медицина ла таный. Ошо өлкәлә тикшеренеүсе профессор, Сеченов университеты лабораторияһы мөдире Анатолий Скальный белдереүенсә, Рәсәйҙең күпселек территорияһында йәшәүселәрҙә тап ошо матдәләрҙең етешмәүе асыҡланды. Мәҫәлән, 30-40 процент рәсәйлелә цинк ҡытлығы күҙәтелә, ә инде диабет, үпкә ауырыулы, ОРВИ-ға тиҙ бирешеүсе хроник сирлеләрҙә был ҡытлыҡ 60-80 процент тәшкил итә. Шуға күрә ошондай хәлдә иҫтә тотоп, әлеге препараттарҙы анализ бирмәйенсә лә 1-3 ай дауамында тейешле дозала ҡабул итергә мөмкин, тип иҫәпләй профессор. Ә шулай ҙа яҡшырағы - организмдағы был элементтарҙы анализ биреп тикшергәндән һуң ғына ҡулланыу фарыз, тип өҫтәргә кәрәктер.

Үткән аҙнала Өфөнөң Сипайлово биҫтәһе аптекаларында ошо препараттарҙы эҙләп йөрөргә тура килде. Хәҙер кеше көнө-төнө социаль селтәрҙә ултырып, мәғлүмәтле була бара, күрәһең (ярай ҙа, рәсми сайттарҙағы квалификациялы белгес һәм табиптарға юлыҡһалар). Провизорҙар әйтеүенсә, һуңғы ваҡыт тап ошо витаминдарҙы күпләп алалар икән, уларҙың йүнлеләре һатыуҙа ҡалмаған да хатта. Арзанлы, шуның өсөн дә насар үҙләштерелеүсе төрҙәре генә ята. Ә бына цинктың яҡшы үҙләштерелеүсе, файҙалы иҫәпләнгән цитрат (60 процент үҙләштерелә), пиколинат (60 процент), хелат (50 процент) төрҙәре бик ҡиммәт йә бөтөнләй юҡ. "Фармленд" аптекаһында минә уның ... 700 һумлығын тәҡдим иттеләр, тәбиғи, баш тартырға тура килде. Хатта ҡы 310 һумлыҡ ни бары 25 төймәле Польша препараты "Цинктерал"ды ла алып булманы. Ә бына үҙ илебеҙҙә, Мәскәү өлкәһендә етештерелгән ҡайын бәшмәге чагаһының 50 грамлыҡ бер ҡабы 204 һум 55 тин тора. Шуныһы ғәжәп, "Фармленд"тан тиҙерәк табанды ялтыратып, икенсе бер аптекаға инһәм, шул уҡ 50 грамлыҡ чага (Алтайҙа сыҡҡан)... ни бары 40 һум! Был ни хәл?.. Аптекаларҙың да бәгзеләре хәҙер баҙар һатыусылары кеүек һатыулаша, кеше ихтыяжын файҙаланып, күберәк аҡса эшләп ҡалырға маташа, күрәһең.

Шуныһы ғәжәп: дарыуҙарға хаҡтар күҙгә күренеп арта, ә рәсми мәғлүмәттәр бөтөнләй киреһен һөйләй. Мәҫәлән, Росздравнадзор кеше ғүмере өсөн мөһим дарыуҙарға йыл башынан хаҡтарҙың ни бары - 3,8, ә башҡа төр препараттарға 5-7 процент ҡына артыуы хаҡында хәбәр итһә, tinkoff.ru быйыл ярты йыл эсендә генә лә дарыуҙарҙың 40-100 процентҡа артыуын күҙәтә. Ә бына Ufa1ru сайты ҡайһы бер препараттар хаҡын 2019 йылғы менән сағыштырып, дүрт йыл эсендә дарыуҙарҙың ...100-ҙән алып 500 процентҡа тиклем артыуын раҫлай: мәҫәлән, "Панангин" 147 һумдан 300-гәсә, "Тромбо Асс" - 38-ҙән 147-гә, "Бронхомунал" 260-тан 1635-кәсә, "Серетид Мультидиск" 1872-нән 2 163 һумғаса артҡан, тип белдерә. Башстат иһә һуңғы аҙнала ғына "Валидол"дың - 3,3, "Эргоферон"дың - 1,4, "Аллохол"дың 1,3 процентҡа артыуын белдерә. Ысынлап та, "Парламент гәзите" ғәжәп итеүенсә, "дарыу хаҡтарын кем космосҡа осорған", тип баш ватырға ғына ҡала. Бынан 5-6 айлап элек уҡ әле РФ һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Сергей Глаголев Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ассамблеяһында сығыш яһап, коррупция һаҙлығына баткан фармацевтика индустрияһын ябай халыҡҡа өр-яңы дарыу саралары баҙарын ябырға маташыу, хаҡтарҙы арттырыу фактарын тәнҡитләп сыҡҡайны. Кем инде ул министр урынбаҫары фармацевтика монополияһы өсөн! Күрәһең, бындағы ҡырын эштәргә Рәсәй Президенты йә булмаһа Хөкүмәт кимәлендә ҡыҫылыу талап ителәләр, тик уларҙа әле дарыу ҡайғыһы юҡ, буғай...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ЙӘШТӘР НИНДӘЙ ТУЛҠЫНДА?



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Әлимә САЛАУАТОВА, 1-се Республика полилингваль гимназияһының тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары:*** Минә хәҙерге заман башҡорт йәштәре ныҡ оҡшай. Баш ҡалаға килеп, йорттар һалып, балалар үҫтереп, үҙҙәренә ниндәйҙер милли мөхит булдыра алырлыҡ аҡылға һәм көскә эйә улар. Төрлө саралар ойоштороп, концерттар ҡуйып, шул арала балаларҙы туплап, уларға башҡорт биҙәүестәре яһарға өйрәтеп тә өлгөрәләр. Өфөнөң һәм Өфө тирәләй урынлашҡан ауылдарҙа йәшәүселәр шулай итә һәр хәлдә. Өйҙә тик ятмайҙар, сит илгә лә сығалар, бик булмаһа, Ирәмәлгә менеп төшәләр. Ошондай әүҙем хәрәкәттең ауыл йәштәре араһында ла таралыуын теләр инем. Йәғни, кемдәндер көтөп ята торған ваҡыт үтеп, тот та үҙең эшлә, быны бер кем дә тыймай. Бөгөн кеше шундай шарттарға ҡуйылған: ул бер кәм эсендә лә әллә күпме мәсьәләне хәл итеп өлгөрөргә тейеш. Ошо тулҡында йәштәр үҙен ышаныслы тоя.

Беҙ үҫкән саҡта әсәйҙәр балаларҙың уҡыуына ла, һаулығына ла әллә ни иғтибар бирмәне һымаҡ. Мәле лә шулай булғандыр инде, көнө-төнө күмәк хужалыкта бил бөккән, йортта мал ҡараған, уға ризыҡын хәстәрләргә мәжбүр булған һәм шул уҡ ваҡытта күмәк балалар үҫтергән кешеләрҙең бик ваҡыты ла булмағандыр. Бәлки, шуғалыр ҙа, беҙ бар йәнәттән ныҡ булып үҫкәнбеҙҙер ҙә. Артыҡ сөсөләнеү, әпәүләү ҙә нисектер ярамаған нәмә һымаҡ ине. Шулай ҙа мине 8-се класҡа Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға ебәрергә хәл итеүҙәре өсөн ныҡ рәхмәтлемен. Бөгөнгө атай-әсәйҙәр балаһының сәләмәтлеген генә түгел, киләсәктә ниндәй һөнәр эйәһе булырын алдан самалап, ошо маҡсатҡа өлгәшеү өсөн аҡсаһын да йәлләмәй. Юғары уҡыу йорттарына ғына түгел, балаһын шул уҡ 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына, башҡа гимназия-колледждарға, республикала һуңғы йылдарҙа асыла башлаған полилингваль гимназияларға алып киләләр. Мәҫәлән, үҙебеҙҙең микрорайон балаларынан тыш, беҙҙең гимназияла уҡырға теләүселәр йылдан-йыл күбәйә. 5-се класҡа имтихан тапшырып инеү мөмкинлеген дә күҙ уңайынан ысҡындырмайҙар. Быны ла бик хуплайым, сөнки булыр бала бишегенән, ошондай мөхиттә белем алһа, уға киләсәктә күпкә еңелерәк булаҡсаҡ.

Белемле кешеләре күберәк булған һайын, милләт тә күтәрелә. Шуға ла уҡыйҙар ҙа, һөнәре буйынса эшләмәйҙәр, тип тәнҡитләһәләр ҙә, белемле мендә йығыр, тип юҡҡа ғына әйтелмәгән. Шулай ҙа беҙгә балаларыбыҙҙы баҫып, тыйып үҫтереүҙән бер аҙ китергә кәрәк. Эйе, башҡорт балалары тыйнаҡ, аҡыллы, әммә бөгөн бик белеме булмаған кеше лә үҙен күрһәтеп, юғары үрҙәр яулай алғанын аңлап торабыҙ. Төрлө сараларҙа башҡорт балаларының баҫалҡылығы уларҙың файҙаһына эшләмәүен күреп йөрөйөм. Шуға ла белемле, аҡыллы балаларыбыҙ үҙенең бәсен һәм баһаһын да белеп үҫһен.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан спортсылары билбау көрәше буйынса Донъя кубогында еңеү яуланы. Ярыш уҙған ял көндәрендә Екатеринбургта үтте. Иң көслөләр исеме өсөн 20 ил вәкиле көрәште. Хәбәр ителеүенсә, Алина Пухова (66 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһы), Олимпия Мәхийәнова (76 килограмм) һәм Дмитрий Балянов (100 килограмдан ашыу) Донъя кубогына эйә булды.

✔Сибай егете Заһир Сәфәрғәлин һәм Баймаҡ ҡыҙы Юлиә Сөләймәнованың Өфөлә фатир алыу өсөн пластик сертификаты юғалған. Йәш ғаиләгә уны Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бүләк иткәйне. "Юғалған сертификат буйынса ғына фатир һатып алып булмай, сөнки ул бер ниндәй ҙә юридик көскә эйә түгел. Йәштәрҙең ҡулында торлаҡҡа рәсми документтар барҙыр, моғайын", - тип билдәләнә белгестәр.

✔Бишбүләк районында Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы, Рәсәй милли гвардия ғәскәрҙәре федераль хеҙмәтенең республика буйынса идаралығы, Һунарсылар һәм балыҡсылар ассоциацияһының законһыҙ һунар итеүҙе асыҡлау һәм тыйыу буйынса берлектәге сараһы уҙҙы. Рейд барышында Һунарсылар һәм балыҡсылар ассоциацияһына беркетелгән һунар биләмәләрендә бер йәшлек мышыны рәхсәтһеҙ аулау асыҡланған.

✔Миәкә районында Халыҡ-ара М.Аҡмулла көндәре уңайынан "Аҡмулла нәсихәттәре" республика фольклор байрамы уҙҙы. 16 йәшкә тиклемге номинацияла Миәкә районының Ҡаран-Ҡунҡаҫ ауылынан Рамаҙан Шәйгәрҙәнов I дәрәжә лауреат исемен яуланы; 16 йәштән өлкәнерәктәр номинацияһында Гран-приға Бөрйән районы сәсәне Шәүкәт Мәзитов лайыҡ булды. Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Ғүмәровҡа Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге премияның почетлы лауреаты исеме бирелде.

✔Рәсәйҙәрҙә Әсәлек капиталын биреү шарттарының үҙгәреүе тураһында иҫкәртteләр. Дәүләт Думаһы депутаттары беренсе уҡыуҙа балаһы тыуған ваҡытта Рәсәй гражданлығына эйә булғандарға һәм бала Рәсәй гражданы булып тыуған осраҡта ғына Әсәлек капиталын түләүҙе күҙ уңында тотҡан законға төҙәтмәләрҙе хупланы.

ҠЫҪҠАСА

# ТУҒАН ТЕЛГӘ ТЕРӘК...

**Баш ҡалабыҙҙың Фатима Мостафина исемендәге 20-се һанлы башҡорт гимназияһында уҡыусыларҙа туған телебеҙгә һөйөү тәрбиәләү өсөн төрлө ҡыҙыҡлы саралар йыш уҙғарыла.** Яңыраҡ Өфө ҡалаһының 4-се һанлы моделле китапханаһы мөдире Гөлфиә Шәрипова ошо гимназияның башҡорт теле уҡытыусыһы Нурзилә Нәҙерғолова һәм педагог-китапханасы Разия Ғәйнуллина булышлығында уҡыусылар менән осрашыу ойошторҙо. Осрашыу барышында ойошторолған әңгәмә туған телебеҙгә арналды. Гөлфиә Шәрипова башҡорт телен һәйбәт белеүҙең ни өсөн кәрәклеген сағылдырған тиҫтәгә яҡын миниплакаттар алып килгәйне. Уҡыусылар, үҙҙәренә оҡшаған плакаттарҙы һайлап алып, класс алдында унда яҙылғандарҙы иптәштәренә һөйләп-аңлатып бирҙе: башҡорт телендә матур итеп һөйләшә, уҡый-яҙа белергә; туған телдә аралашып, бер-береңде аңлай алырға; ҡыҙыҡлы әңгәмә ҡора белергә; донъяны танып белергә; үҙ халҡыңдың тарихын өйрәнергә; ата-бабаларҙың йолаларын өйрәнергә; туған телеңдә ижад итергә өйрәнергә һ.б.

✓ **Стәрлетамаҡ районы умартасыһы Рөстәм Резбаев махсус хәрби операция зонаһына тоннанан ашыу йүкә балын оҙатты.** Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, Рөстәм Резбаев төбәктең тәжрибәле умартасыларының береһе, ошо өлкәлә 40 йыл эшләй. 2023 йылда Рөстәм Резбаевтың хужалығында 25 тонна татлы ризыҡ етештерелгән. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, республикала быйыл бөтәһе 6 мең тонна бал йыйылған. "Рөстәм Резбаев күп йылдар Иглин районындағы Оло Теләк умартасылыҡ тәжрибә станцияһында эшләгән, - тип яҙа Радий Хәбиров. - Хәҙер уның үҙ хужалығында 660 бал ҡорто ғаиләһе бар. Предприятие бал эшкәртеү һәм фасовкалау өсөн заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған. Яҡташыбыҙҙың тырышлығы менән башҡорт балы, уның тәме, юғары сифаты һәм шифалы үҙенсәлектәре тураһында Канада, Америка, Ҡытайҙа ла беләләр. Киләсәктә умартасы Ҡытай Халыҡ Республикаһында үҙенең бал һатыу компанияһын асырға ниәтләй".

✓ **Баш ҡалабыҙҙың Совет майҙанында юл ҡағиҙәләрен боҙоуҙы теркәй торған комбәҙле яңы "Пульсар" комплексы сафҡа индерелде.** Комплекс Зәки Вәлиди урамынан Пушкин урамына тиклемге Совет урамы арауығында автомобилдәрҙе парковкалау ҡағиҙәләрен боҙоу осраҡтарын теркәй. Уның бороло торған өс камераһы түңәрәк буйынса күҙәтеү алып бара. Комплекстың функцияларына ярашлы, тиҙлек режимын боҙоу, юл билдәләре, һыҙма билдәләр күрһәткестәрен үтәмәү, водителдең телефондан һөйләшеп барыуын, хәүефһеҙлек ҡайышын ҡулланмау һ.б. шундай ҡағиҙә боҙоуҙар теркәләсәк. Шулай уҡ транспорт ағымдарын реаль ваҡыт арауығында тикшереп, күҙәтеп тороу, эҙләү базаһында торған автомобилдәрҙе лә табыу мөмкинлеген тәьмин итә ошо комплекс. Быйыл техник ҡоролмалар башҡа урамдарҙа ла ҡуйыласаҡ. Быға тиклем Республика Башлығы Радий Хәбиров баш ҡала мәктәптәре янында юл ҡағиҙәләрен боҙоуҙы теркәүсе системалар урынлаштырырға ҡушҡайны.

ЕТӘКСЕ ӘЙТТЕ!

# ИҢЕБЕҘҘӘ - БӨЙӨК БУРЫС!



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға мөрәжәғәт менән сығыш яһап, быйылғы йылға йомғаҡтар яһаны һәм киләһе йылға яңы бурыстар билдәләне. 2024 йылда республиканың идара итеүсе командаһы 3 тармаҡта нығыҡлы эшләргә тейешлеген билдәләне ул.**

● Уларҙың тәүгеһе - Махсус хәрби операция маҡсаттарын тормошҡа ашырыу өсөн әүҙем эш алып барыу, алғы һыҙыҡтағы яугирҙарға ярҙам итеү, яңы ирекле подразделениелар йыйыуға булышлыҡ итеү, гуманитар ярҙам. "Икенсеһе - махус хәрби операция ветерандары, инвалидтары һәм уларҙың ғаиләләре, һәләк булған геройҙарҙың туғандары һәм яҡындары менән эшләү, ошо геройҙарҙың исемдәрен мәңгеләштереү, хәрбиҙәргә һәм уларҙың туғандарына медицина реабилитацияһы үтеүгә ярҙам итеү, йәштәр араһында хәрби-патриотик эш алып барыу, ил эсендәге сәйәси хәлде тотороҡһоҙландырырға, халыҡ-ара конфликттарҙы киҫкенләштереүселәргә ҡаршы тороу. Былар барыһы ла МХО темаһының тылдағы дауамы. Ошо ике йүнәлештәге бурыстарҙы хәл итеү өсөн тағы ла өсөнсө йүнәлеш мөһим - ул республика үҫеше буйынса пландарҙы һәм программаларҙы дауам итеү, иҡтисадты, социаль өлкәне нығытыу, инвестиция, технология, инфраструктура буйынса проекттарҙы тормошҡа ашырыу, халыҡтың йәшәү сифатын артабан да яҡшыртыу", - тине Радий Хәбиров үҙенең мөрәжәғәтендә. Әлеге мәлдә 2030 йылға тиклем ваҡыт арауығын үҙ эсенә алған ҙур стратегик программа өҫтөндә эш барыуы ла билдәләнде.

● Халыҡ өсөн иң яҡын һәм мөһим темаларҙың береһенә - социаль өлкә һәм демографияға ла туҡталды республика Башлығы. Киләһе йыл Рәсәйҙә Ғаилә йылы тип иғлан ителгәйне. Тимәк, ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу, ғаиләләргә ярҙам итеү өҫтәнлек аласаҡ. 10 йыл эсендә Башҡортостанда күп балалы ғаиләләр һаны 59 меңгә еткән. Уларҙың һаны буйынса республика Волга буйы федераль округында - беренсе, Рәсәйҙә етенсе урында. Балаһы булған 230 мең ғаилә төрлө льготалар менән файҙалана.

● Һаулыҡ һаҡлау системаһын яңыртыу буйынса эштәр алып барыла. Уның һөҙөмтәһе булып бөгөн Башҡортостанда ғүмер оҙайлығы 73 йәшкә еткән. 2024 йылда льготаға эйә булыусыларҙы дарыуҙар менән тәьмин итеү өсөн 6,3 млрд һум һалынған. Өфө ҡалаһында медицина учреждениелары модернизациялана, киләһе йылда быны өсөн 500 млн һум бүленәсәк, ә 2025 йылдан башлап йылына 1,5 млрд һум ҡаралған. Шулай итеп, Өфөнөң 118 мең медицина объекты яңырасаҡ, быны өсөн барыһы 8 млрд һум тотоноласаҡ. Республика программаһы сиктәрендә ошо арала баш ҡаланың Затон биҫтәһендә, Баймаҡта һәм Мәсәғүттә поликлиникалар сафҡа индереләсәк, Оло Ыҡтамаҡта тиҙ ярҙам станцияһы булған дауахана асыласаҡ. Шулай уҡ 43 муниципалитетта 80 ФАП барлыҡҡа килгән, киләһе йылда тағы ла 54 пункт өҫтәләсәк. Өфөлә Балалар онкологияһы һәм гематологияһы үҙәге лә ишеген аса. 2024 йылда Республика кардиоүҙәгендә ремонт тамамлана. Халҡы күп булмаған ауылдарға эшкә барыусы педиатр, терапевт һәм дөйөм практика табиптары быйылдан 3 млн һум күләмендә түләүҙәр ала башлаған.

● "Эксперттар билдәләүенсә, мәғариф һәм фән үҫешенә иғтибар биргән илдәр һәм төбәктәр генә ҙур үҫешкә дәғүә итә ала. Беҙ ҙә ошо юлды һайланыҡ. Ил Президенты ҡушыуы һәм федераль Хөкүмәт ярҙамы менән һуңғы йылда ҙур финанс мөмкинлектәр алдыҡ. Мәктәптәрҙе модернизациялауға ғына 7,6 млрд һум йүнәлтелде. Быйыл 6 мәктәп һәм балалар баҡсаһы сафҡа инде, йыл аҙағына тиклем тағы ла 3 мәктәп һәм 2 балалар баҡсаһы асыласаҡ", - тине Радий Хәбиров. Шул уҡ ваҡытта, тип билдәләнде артабан, федераль программа буйынса ауыл мәктәптәре лә ремонтлана. Йыл һайын ауылда эшләгән 150 уҡытыусыға грант бирелә. Аҡсалата бүләкләүҙәр төрлө конкурс еңеүселәре, колледж уҡытыусылары, тәрбиәселәр өсөн дә ҡаралған. Ошо арала тәүге объекты ишектәрен асасаҡ вуз-ара кампус - төбәктәр араһында беренсеһе. Шулай уҡ спорт объекттары, юлдар, торлаҡ йорттар төҙөү, ихаталар, подъездар ремонтлау буйынса ла республика алдынғылар рәтендә. "Алдынған өлөшсөләр" мәсьәләһе лә ошо арала аҙаҡҡаса хәл ителәсәк.

● "Беларусь, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡытай, Төркиә, Иран республикалары, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре һ.б илдәр менән иҡтисади, шул иҫәптән мәҙәни һәм гуманитар өлкәләрҙә лә әүҙем хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Сеймал, энергетикаға ҡағылмаған экспорт, шулай уҡ экспортҡа эшләгән предприятиелар арта. Өсөнсө йыл рәттән Башҡортостан һөҙөмтәле эшләгән сәнәғәт сәйәсәте йәһәтенән иң яҡшыларҙың береһе тип табыла. Инвестиция климаты торошо милли рейтингында ла беҙ - дүртенсе", - тине Радий Фәрит улы уңыштарҙы барлап. Шулай уҡ аграр өлкәлә лә, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ өлкәһендә лә яҡшы һөҙөмтәләр бар. Эшһеҙлек кимәле түбән - 2,2 процент.

● "Көндәлек эштәр араһында ҡайһы саҡта эргәбеҙҙә йәшәгән һәм тыумыштан, йәки берәй йәрәхәт арҡаһында сәләмәтлеге сикләнгәндәр барлығын да күрмәйбеҙ. МХО-ла ауыр яралар алыусы егеттәр ҙә бар. Беҙҙең бурыс - улар үҙҙәрен кәм итеп тоймаһын, медицина ярҙамы алһын, эшкә урынлашһын, спорт һәм ижад менән шөғөлләнһен өсөн барыһын ла эшләү. Шуға ла киләһе йылды Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр хаҡында хәстәрлек күреү йылы тип иғлан итергә тәҡдим итәм. Тәү сиратта, норматив-хоҡуҡи база өҫтөндә эшләргә, закондарҙы улар мәнфәғәтендә хеҙмәт итеүенә булышлыҡ итергә кәрәк. Уларҙы хатта сәләмәтлеге сикләнгән тип әйтеүе лә ҡыйын, ысынында иһә улар сикһеҙ мөмкинлектәргә эйә кешеләр. Уларға бары тик ярҙам итергә генә кәрәк. Шул саҡта улар ҙа беҙҙең эргәлә тулы ҡанлы тормош менән йәшәй аласаҡ", - тине Радий Хәбиров.

**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға мөрәжәғәтен республика Башлығы шундай һүҙҙәр менән тамамланы: "Беҙ ауыр һынауҙар осоронда йәшәйбеҙ. 2024 йыл да еңелдән булмаясаҡ. Мин ышанам - беҙ барлыҡ бурыстарҙы ла еңеп, тағы ла көслөрәк, аҡыллыраҡ буласаҡбыҙ. Геройҙарыбыҙҙың теүәл килеш әйләнеп ҡайтырына ла ышаныҫым ҙур. Беҙ барыбыҙ ҙа тормошто яҡшыраҡ итеү өсөн көрәшәбеҙ. Киләсәк быуын өсөн төҙөйбеҙ, тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе, мәңгелек ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлайбыҙ. Беҙҙең быуынға бөйөк бурыс - Рәсәйҙе һаҡлау өлөшө төшөүе менән ғорурланырға тейешбеҙ".**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓19 декабрҙә урындағы ваҡыт менән көндөҙгө сәғәт 3-сө яртыла Өфөнөң тимер юл вокзалына Ҡыш бабай поезы килде, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Транспорт министрлығынан. Ҡыш бабай поезы - Яңы йыл тылсымсыһының байрамса биҙәлгән күсмә резиденцияһы, уның составында балалар өсөн уйындар һәм күңел асыу вагондары бар. Хәбәр ителеүенсә, проект 2021 йылдың 5 декабрендә башланды. Ике йыл эсендә унда Рәсәйҙең 150-нән ашыу ҡалаһында 900 меңдән ашыу кеше ҡатнашты.

✓Яңы йыл алдынан Өфөлә һәр ваҡыттағыса ылыҫлы ағастар менән сауҙа итеү ойоштоҙола. Баш ҡалала шыршы баҙарҙары эшләй башланы ла инде. Һатыу өсөн халыҡ күп йөрөгән урындар һайланған, тип хәбәр иттеләр мэриянан. Урман ҡупшыҡайын ҙур сауҙа предприятиелары эргәһендә, ауыл хужалығы һәм фермер йәрминкәләрендә лә һатып алырға мөмкин. Әлеге ваҡытта шыршы һатыу өсөн 17 урын билдәләнгән.

✓Сәгит Агиш урамында яңы ҡар иретеү пункты эшен башланы. Өфөнөң тиҙ үҫеүе һәм ҡар полигонының йыраҡта урынлашыуы һөҙөмтәһендә ҡар базалары барлыҡ ҡарҙы ҡабул итеп өлгөрмәй ине. Шуға ла баш ҡаланың үҙендә ҡар иретеү ҡоролмаһы төҙөү мәсьәләһе ҡалҡып сыҡты ла инде. Был пункт ҡарҙы сығарыу эшен тиҙләтергә мөмкинлек бирәсәк. Был территорияны һайлағанда унда инженер селтәрҙәренең, шул иҫәптән канализацияны насос станцияһы булыуы, транспорт туктау өсөн уңайлы икәне иҫәпкә алынған. Унда, тәү сиратта Ленин, Совет, Киров районданрынан сығарылған ҡар ирететәсәк. Пункт тәүлегенә 1200 кубометр ҡар иретеү мөмкинлегенә эйә. Канализация торбалары йылыһын ҡулланып эшләүсе камераларҙа ирегән ҡар артабан ҡаланың канализация коллекторына ағыҙыла.

✓"ЮВТ Аэро" авиакомпанияһы "Өфө" аэропортынан яңы йүнәлеш - Ярославль ҡалаһына тура рейс асылды. Осоштар дүшәмбе һәм шаршамбы көндәрендә Bombardier CRJ200 самолеттарында башҡарыла. Самолет рейсҡа Өфөнөң көндөҙгө 1 тула 10 минутта сыға. Юлға 1 сәғәт 40 минут ваҡыт китә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Юғиһә, ҡапҡаһын асмағандар ҙа була. Беҙ бары тик ҡарап, кәңәштәр бирәбеҙ, уларҙы төҙәтеү иһә һинең милегеңдә лә, ғүмереңдә лә һаҡлап ҡаласаҡ.*



ИҪКӘРТӘЛӘР

# УТТЫҢ ЯЛЫ ЛА...

## ҡойроғо ла юҡ

**Ут - борондан ҡот, йылылыҡ, йәшәү сығанағы иҫәпләнһә лә, уның хәүефле яғын да оноторға ярамай. "Уғрынан ҡалыр, уттан ҡалмаҫ", тип халыҡ бушҡа ғына әйтмәй. Дөрөҫ ҡуллана белмәһәң, ул мөлкәтеңде лә, хатта ғүмереңде лә юҡҡа сығара ала. Өфө ҡала округының Янғын хәүефһеҙлеге идаралығы рәйесенең янғын һүндереү буйынса урынбаҫары Рәсим Мидхәт улы АБДУЛЛИН һәм янғындарҙы иҫкәртеү буйынса урынбаҫары Рөстәм Рәис улы МӨХӘМӘТШИН менән бөгөн ошолар хаҡында әңгәмәләшәбеҙ.**

**➔ Янғын һүндереүсе һөнәре ниндәһе менән йәлеп итте һеҙҙе? Ут стихияһы һеҙҙең өсөн нимә ул?**

**Р. Абдуллин:** Беҙ үҫкән замандарҙа егеттәр хәрби булырға, хәрби форма кейергә, погондар тағырға хыяллана ине. Янғын һүндереү хәүефһеҙлеге системаһында эшләүселәрҙең дә үҙенең формаһы, званиелары бар, шуға ла ошо һөнәрҙе һайланым. Был йүнәлештә белем алырға теләүселәр өсөн ул ваҡытта Свердловск, хәҙер инде Екатеринбург ҡалаһында уҡыу йорто бар. Уны тамамлаһаң, офицер дәрәжәһен алаһың. Ә 20-21 йәшлек егет өсөн лейтенант булыу ҙа ҙур мәртәбә. Эшләй башлағас инде, һынатмайым, тип тырышаһың, йәйләп тәжрибә туплана. Бына шулай 42 йыл үтеп тә киткән. Хәҙер ҙә янғын һүндереүсе һөнәре егеттәр араһында бик популяр, эшкә килергә теләүселәр күп. Әммә беҙҙең замандағы барыбер кадрҙар әҙерләүгә, уларҙың белемен камиллаштырыуға ҙур иғтибар бирелә ине, тип уйлайым. Мин дә шулай Мәскәүҙә юғары белем алдым.

**Р. Мөхәмәтшин:** Тәбиғәттең 4 стихияһының береһе булған утты боронғо философтар ҡайнар, сағыу, көслә, әммә мәрхәмәтһеҙ тип һүрәтләй бит. Ул, ысынлап та, мәрхәмәтһеҙ һәм аяуһыҙ була ала. Янғын хәүефһеҙлеге эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше лә бит шуға - уны иҫкәртеү, булдырмау. Ғаиләбеҙҙә 3-сө быуында ошо һөнәрҙе һайлаған кеше буларак, мин быны яҡшы беләм. Минең үҫмерлек, һөнәр һайлаған мәлем үткән быуаттың 80-се йылдары аҙағы, 90-сы йылдары башына тура килде һәм, ысынлап та, был ваҡытта егеттәр хәрби булырға хыяллана торғайны. Хәрби-патриотик клубта шөғөлләндем, шуға ла Рязань десант училищеһына барырға ла уйлап ҡуйғайным. Шулай ҙа ҡартатай, атай юлынан киттем - Свердловск янғын хәүефһеҙлеге-техник училищеһына уҡырға индем. Юғары белемде ситтән тороп алдым, янғын хәүефһеҙлеге буйынса төрлө йүнәлештәрҙә эшләнем. Хәҙер был профилактикалау өлкәһендәмен.

**➔ Һеҙ хеҙмәт иткән Янғын хәүефһеҙлеге идаралығы - ул Өфөнөң муниципаль берәмеге. Бындай тәжрибә башҡа шундай ҙур ҡалаларҙа ҡулланыламы һәм уның әһәмиәте нимәлә?**

**Р. Абдуллин:** Башҡа ҡалаларҙа ла бар, әммә Өфөләге кеүек профессиональ яҡтан әҙерлекле шәхси составы, янғын һүндереү депоһы, техникаһы булған идаралыҡ - Рәсәйҙә берҙән-бер. Беҙҙең 11 подразделениебыҙ, айырым профилактикалау корпусыбыҙ, ҡаланың һәр районы хакимиәтендә профилактика бүлектәребеҙ бар. Ҡала башлыҡтары ошондай янғын хәүефһеҙлеге идаралығы булдырып, бик дөрөҫ ҡарар ҡабул итте ваҡытында.

Бындай идаралыҡ булдырыуға шул да этәргес булды - Өфөнөң географик йәһәттән урынлашҡан урыны бик үҙенсәлекле, төрлө яҡлап йылғалар уратҡан. Ҡала һуңғы йылдарҙа территорияһы яғынан да йылдам үҫешә. Баш ҡала тиһәк тә, уның сите төрлө яҡлап бәләкәй ҡатлы төҙөлөш һөҙөмтәһендә киңәйә бара, халыҡ та фатирҙарҙан баш тартып, ауылса йорттарҙа йәшәргә ынтыла. Бөгөн Өфөнөң ошондай 24 торағы бар. Бындай шарттарҙа федераль янғын хәүефһеҙлеге хеҙмәтенә бик ауырға төшөр ине. Беҙҙең идаралыҡ иһә килеп сыҡҡан янғындарҙы һүндереү өҫтөнә, уларҙы булдырмау өсөн күп эш башҡара.

**➔ Профилактика, тигәнгә нимәләр инә? Ғөмүмән, халыҡта янғын хәүефһеҙлеген күҙәтеү мәҙәниәте бармы? Әллә, миңә ҡағылмаҫ әле, тигәнерәк ҡараштағылар күберәкме?**

**Р. Мөхәмәтшин:** Янғынды һүндереүгә ҡарағанда, булдырмау яҡшыраҡ. Әйтәйек, баҡсалар буйлап тикшереп йөрөйбеҙ икән, берәүҙе лә, ни эшләп өйөңдәге мейесеҙ үндай насар хәлдә, ни өсөн мунсаңдың мейесе шулай һалынған, ни өсөн күршең менән тораҡ бинаһлар араһында һаҡлана торған арауыҡ һаҡланмаған, тип әрләп, ҡурҡытып йөрөмәйбеҙ. Юғиһә, ҡапҡаһын асмағандар ҙа була. Беҙ бары тик ҡарап, кәңәштәр бирәбеҙ, уларҙы төҙәтеү иһә һинең милегеңдә лә, ғүмереңдә лә һаҡлап ҡаласаҡ.

Һуңғы йылдарҙа граждандарҙың айырым категорияларын бушлай янғын киҫәтеү ҡоралмалы менән тәьмин итеү ҙә беҙҙең бурыс. Әлеге көндә бында 15 категория ҡарай. Быға ла көләп ҡарарға ярамай, тәжрибә күрһәтеүенсә, был киҫәтеүселәр бөгөнгө көнгә әллә күпме ғүмерҙәрҙе һаҡлап ҡалды ла инде. Ҡаланың мәғариф идаралығы менән берлектә методик план төҙөп, балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә эштәр үткәреүҙең дә үҙ һөҙөмтәләре бар. Йыл да балаларҙың ут менән уйнауы арҡаһында 5-6 янғын теркәлә торғайны, былтыр бындай 2 янғын булды, быйыл иһә - 1. Торлаҡ фондында ла - күп фатирлы йорттарҙа ла, шәхси йорттарҙа ла янғындар һаны кәмей.

**Р. Абдуллин:** Һәр миҙгелдең үҙенең проблемалары бар бит ул. Быйыл яҙ, йәй ниндәй ҡоро килде, шуға ла янғын хәүефһеҙлеге режимы хатта 10 октябргә тиклем дауам итте. Был үҙенең файҙаһын бирҙе, тип уйлайым, республикала Ҡурған, Свердловск өлкәләрендәге кеүек янғындар булманы. Тайғанды ла 100 кеше тынлай, ә бына 1-һе ут тоҡандыра. Бер әбей бәләкәй генә сүп өйөмөн яндырам тип, күршеләрен өйһеҙ ҡалдырҙы - 4 фатирлы торлаҡ йорт тулыһынса янып бөттө. Шундай миҫалдарҙан һабаҡ алып өйрәнергә кәрәк барыһына ла. Хәҙер инде өйҙәрҙә йылытыу системаларына күберәк иғтибар бирелә. Ҡатлы һыуыктарҙа янғындар күберәк ошо арҡала сыға.

(Дауамы 6-сы биттә).

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

## ЗӘКӘРИӘ ШӘРӘФЕТДИН УЛЫ АҠНАЗАРОВ

З. Ш.Аҡназаров - күренекле комсомол, партия һәм дәүләт эшмәкәре. 1924 йылдың 22 августында БАССР-ҙың Йылайыр кантоны (хәҙерге Баймаҡ районы) Ямаш утарында тыуған. Ата-бабалары - бөрйән ырыуы башҡорттарынан. Ямаш ауылында башланғыс мәктәпте тамамлағас, 1-се Этҡол ауылының ете йыллыҡ мәктәбендә уҡый. 1940 йылда Темәс педучилищеһын тамамлай, ике йыл Мырҙа башланғыс мәктәбендә балалар уҡыта. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. К. А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтын (1950), Өлкә-ара партия мәктәбен (Өфө, 1948), КПСС Үҙәк Комитеты ҡарамағындағы Ижтимағи фәндәр академияһын (Мәскәү, 1962) тамамлаған.

1946 - 1962 йылдарҙа З.Ш. Аҡназаров ВЛКСМ-дың Баймаҡ райкомының икенсе секретарынан комсомолдың Башҡортостан өлкә комитетының беренсе секретарына тиклем етәксе вазифалар биләй. 1962 - 1986 йылдарҙа Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Рәйесе. СССР-ҙың 6-9 сы, РСФСР-ҙың 10-сы һәм 11-се, Башҡорт АССР-ының 4-11-се саҡырылыш Юғары Советы депутаты. 1966 - 1971 йылдарҙа КПСС-тың Үҙәк ревизия комиссияһы ағзаһы. Ике Ленин (1971, 1984), Октябрь Революцияһы (1981), ике Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1957, 1966) һәм Халыҡтар дуҫлығы (1974) ордендары кавалеры, бик күп миҙалдар менән бүләкләнгән. Өфө ҡалаһының почётлы гражданы.

## ФӘЙЗУЛЛА ВӘЛИ УЛЫ СОЛТАНОВ

Ф.В. Солтанов - совет осороноң партия һәм дәүләт эшмәкәре, 1922 йылдың 15 октябрендә Башҡорт АССР-ының Йылайыр кантоны (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Ейәнсура районы) Байҙәүләт ауылында тыуған. Ата-бабалары - үҫәргән ырыуы башҡорттары. Ете йыллыҡ башҡорт мәктәбен тамамлағас, Стәрлетамаҡ педагогия техникумында белем ала. 1939 - 1941 һәм 1943 - 1946 йылдарҙа Ейәнсура районының ауыл мәктәптәрендә уҡыта. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. 1946 - 1958 йылдарҙа комсомол һәм партия органдарында эшләй. 1956 йылда К. А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия инситутын, ә 1962 йылда КПСС Үҙәк комитеты ҡарамағындағы Ижтимағи фәндәр академияһын тамамлай.

1962 йылдан алып Бөрө дәүләт педагогия институты ректоры вазифаһын атҡара. 1963 йылдан алып КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты секретары булып эшләй. 1967 - 1990 йылдарҙа Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы Рәйесе. РСФСР Юғары Советының һәм БАССР-ҙың 7-11-се саҡырылыш Юғары Советтары депутаты. I дәрәжә Ватан һуғышы (1985), ике Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1971, 1976), Халыҡтар Дуҫлығы (1982), Ҡыҙыл Йондоҙ (1966) һәм "Почёт Билдәһе" (1966) ордендары кавалеры.

(Дауамы. Башы 48-се һанда).

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Цикорий

❖ Цикорий сәскәһенән әҙерләнгән сәй тынысланырға ярҙам итә, ул йөрәк ритмын яйлата. 2 ҡалаҡ ваҡланған цикорий үләненә (сәскәһе менән бергә) ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут талғын утта йәки һыу парында торорға. Һыуынғансы төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ярты-шар стакан йылымыслатып эсергә.

### Ангина

❖ 1 стакан мүк еләге (клюква) һутына 3 ҡалаҡ бал ҡушып, яҡшы болғарға. Тамаҡты ошо дауа менән көнөнә бер нисә тапҡыр сайҡарға. Һәр сайҡағандан һуң 2 ҡалағын бер аҙ уртта тотоп йотоорға ла кәрәк. Мүк еләге тамаҡтың ауыртыуын һәм шеште баҫа, уны "төньяҡ лимоны" тип юҡҡа атамайҙар.

### Йүтәл

❖ Лимон һәм һарымһаҡ ҡатышмаһын әҙерләргә мөмкин. Бының өсөн 6 баш ҙур һарымһаҡты таҙартырға, 6 лимонды һөйәктәренән таҙартып, ит турағыста ваҡларға. Банкаға һалып, 400-500 грамм бал өҫтәп болғарға һәм 10 көн ҡараңғы урында төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән болғатып торорға. Шунан һуң дауаны ашарҙан 20 минут алда көнөнә 3 тапҡыр 4-әр балғалаҡ ҡабул итергә. Был әҙерләмә йүтәлдән һиҙелерлек ярҙам итә, уны ауырыуҙы иҫкәртеү маҡсатында ла даими ашарға мөмкин.

### Иммунитет

❖ 100 грамм бойҙайҙы йыуып, аҙ ғына һыуҙа 2-3 сәғәт ебетергә һәм салфетка ярҙамында киптереп, ит турағыста тартырға. Шуға 1-әр ҡалаҡ бал һәм ҡаймаҡ (һөт йәки һөт өҫтө булһа ла ярай) ҡушырға. Килеп сыҡҡан дауаны иртәнсәк ас ҡарынға ашарға. Был рәүешле бер ай тукланырға. Дөйөм сәләмәтлекте яҡшыртыуҙан тыш, эсәктәрҙең эшмәкәрлеге лә яйға һалыныр.

### Бронхит

❖ Ҡылыс үлән тамырһабағын ваҡларға һәм шуның 3 ҡалағына 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта ярты сәғәт ҡайнатырға, һыуытып һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/2 стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡашҡалаҡ, ҡашҡа өйрәк**
**(Свиязь)**



Һуна өйрәктән вағыраҡ. Ата ҡашҡалаҡ асыҡ һоро төҫтә, башы көрән, өҫкө яғы һары. Ҡорһағы аҡ, "көҙгө"һө йәшел. Инә ҡоштоң башы һәм түше ҡуңыр, "көҙгө"һө - шәмәхә төҫөндә.

XIX быуаттың аҙағында ҡашҡалаҡ Урал алдында оя ҡороп йәшәһә лә, улар гел аҙ һанлы булды. XX быуаттың уртаһында Иҫке Собханғол ауылынан аҫтараҡ Ағиҙел йылғаһы буйында оя ҡорғанын күрергә тура килде. Хәҙерге ваҡытта башлыса миграция мәлендә Кама, Ағиҙел йылғаларында, Асылыкүл һәм Ҡандракүлдә осрай. Күҙәтеүҙәр буйынса, яҙын улар Дим йылғаһына ла төшә. Һирәгерәк Тиҙ Танып, Буй, Һаҡмар, Оло һәм Кесе Ыҡ, Урал йылғалары буйында оялай.

4-8 ҡош бергә тупланып, апрель урталарында осоп килә башлай. Осоп ҡайтышлай уҡ парҙарға бүленәләр. Үлән насарыраҡ үҫкән урында оя ҡоророға яраталар. Ояларын ергә ҡоралар. 7-11 ап-аҡ йомортҡа һалғас, инә ҡош 22-25 көн баса.

Ҡашҡалаҡ башлыса үлән менән туҡлана торған ҡош. Хатта орлоҡҡа ла иғтибар итеп бармай. Йәш ҡоштар 45 көндән һуң осоу һәләтен яҡшылап үҙләштерә. Августың 20-25-тәренән һуң 8-12 ҡашҡалаҡ бергә тупланып, осоп китә башлайҙар. Был ваҡытта улар бәләкәйерәк йылғалар, күлдәр буйында йәшәй. Сентябрҙә күпләп йылы яҡҡа осҡандары күренә. Бөтөн төбәктәрҙә лә һунарсылар һунар итә торған ҡош иҫәпләнә.

Ҡышты Европаның көньяҡ-көнбайышында һәм көньяғында, Африканың төньяғында һәм Азияның көньяғында үткәрә. Сама менән 18 йыл йәшәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ИҪКӘРТӘЛӘР*

# УТТЫҢ ЯЛЫ ЛА...

## ҡойроғо ла юҡ



(Башы 1-се биттә).

➔ **Ситтән ҡарағанда, янғын хәүефһеҙлеге хеҙмәттәре күберәк шәхси секторға иғтибар итә кеүек. Ә ҡаланың күп фатирлы йорттарында ниндәй хәүеф бар? Һуңғы йылдарҙа 21 ҡаттан да юғарыраҡ йорттар төҙөү модаға инде, һауаға яҡыныраҡ булырға ынтылыуҙа ниндәйҙер романтика бар ҙа, һеҙҙең күҙлектән, быныц кире яғы нимәлә?**

**Р. Абдуллин:** Заман менән бергә төҙөлөш тактикаһы ла үҙгәрә шул. Йорт бейек булған һайын, унда кеше лә күберәк йәшәй, тигән һүҙ. Хәүефһеҙлек күҙлегенән сығып ҡарағанда, кешенең бейектә йәшәргә ынтылыуы минең өсөн сәйер күренә. Төҙөүсегә, әлбиттә, ҡулайлы, бәләкәй генә ерҙә бейек йорт төҙөп ҡуя ла, күберәк аҡса эшләй. Өфөлә хәҙер 22 ҡаттан бейегерәк йорттар бар. Янғын сығып китә ҡалһа, уларҙағы халыҡты эвакуациялау ни тиклем ҡатмарлыҡ тыуҙырасаҡ.

Һәр янғындан һуң белгестәр уның сәбәбен асыҡлай һәм барлыҡ осраҡта ла йә проектта хаталар булыуы асыҡлана, мәҫәлән, саф һауа инеп тора торған система аҙағынаса эшләп етелмәгән, йә эвакуация юлы яңылыш һайланған. Фатир хужалары үҙҙәре лә һаҡһыҙлыҡ күрһәтә - янғын һағы извещателдәре уларҙың интерьерын боҙа, ишек төбөнә ларҙар һап ҡуялар, проекттан тыш үҙҙәренсә коридорҙарҙы бүлеп алалар. Күп фатирлы торлаҡ йорттарҙың вентиляцияһы төҙөлөш осоронда уҡ мотлаҡ күҙәтелә торған талаптарҙың береһе. Күҙгә күренмәһә лә, фатирҙар бер-береһе менән шахта һәм каналдарҙың тотош бер ҙур системаһы менән тоташҡан. Янғын сыҡҡан осраҡта ла төтөн ошо каналдар аша тура атмосфераға сығырға тейеш. Ә һеҙ үҙегеҙ бер стена ҡороп ҡуйып ҡына ла ошо юлды ябыуығыҙ бар. Тағы ла бер бәлә бар күп ҡатлы йорттарҙа. Лифт бар, шуға ла бер ҡатта йәшәүселәр үҙ-ара килешә лә, үтә ел, һыуыҡ тип, баҫҡыстарға сығыу юлын да ныҡ ябып ҡуя. Ә янғын осрағында төтөнгә сығыу юлы ла ҡаплана, ул баҫҡыс майҙансыҡтарына тула һәм кеше унан үҙаллы сыға ла алмауы бар. Торлаҡ фондына ҡыҫкән итаҡтар ҙа ҙур проблема тыуҙыра.

➔ **Кешенең ниндәй ғәҙәттәре һәләкәткә килтерә ала?**

**Р. Абдуллин:** Хәҙер кеше элекке һымаҡ фатирын тынҡыслап тултырмай, кәрәк икән, бар әйберен ике сумаҙанға һыйҙырып, күсеп сығып та килә алалар - быныһы ыңғай күренеш. Тик ололарҙа элекке замандарҙан килгән ғәҙәт һаҡлана әле - балкондар, лоджиялар иҫке әйбер менән тулы. Шулай уҡ балкондарға ҡуйылған эвакуация люктары ябып ныҡытыла, янғын хәүефһеҙлеге баҫҡыстары шунда уҡ алып ташлана. Ә янғын һүндереүселәрҙең мөмкинлектәре сикһеҙ түгел. Ошо урында тағы ла ҡала хакимиәтен маҡтамайынса мөмкин түгел: Рәсәйҙең бер генә ҡалаһы ла Өфө кеүек техника алыуға ҙур сығымдар бүлмәй. 30 метрлы баҫҡысы булған янғын һүндереү машиналары һәр подразделениела бар, әммә бынан тыш беҙҙә хәҙер бейеклеге 42, 50 һәм 68 метрлы 3 техника бар. Аҙаҡҡыһы 20-се ҡатҡа тиклем күтәрелергә һәм кешеләрҙе ҡотҡарырға мөмкинлек бирә. Тик улар бер әр генә, ә ҡала ҙур, бер осонан икенсеһенә барып еткәнсе 1 сәғәт үтеп китеүе бар. Ә ошо люктар аша кеше үҙаллы ла ҡотола алыр ине.

Шулай уҡ бөтөн ерҙә гел әйтеп йөрөйбөҙ: күп ҡатлы йортта ҡайҙалыр нимәлер яна икән, баҫҡысҡа сыҡмағыҙ, зинһар! Ҡасырға уйлайҙар, әммә тоҙаҡҡа эләгеп, һәләк булалар. Төтөндә үтәм дә китәм, тип уйламағыҙ, янғын ваҡытында кислород концентрацияһы аҙая.

➔ **Әйткәндәй, урман янғындары ла ҙур бәлә бөгөн, һеҙгә улар ҡағыламы? Урман янғындарының да сәбәбе булып йышыраҡ кеше факторы торамы?**

**Р. Абдуллин:** Өфө ҡалаһындағы бөтөн нәмәнең дә, шул уҡ иҫәптән, ҡала урмандарының да хәүефһеҙлеге беҙҙең индәрҙә. 22 мең гектар урман - ҡаланың "үпкә"ләре - ул Өфөнөң ғорурлығы. "Өфө муйынсаһы" бик әүҙем төҙәлә, хәҙер унда янғын булдырмау эше лә көнүҙәк мәсьәлә.

**Р. Мөхәмәтшин:** Урманда янғын сығыуҙың башында күбеһенсә кеше тора. Тәбиғәткә сығалар, ут тоҡандыралар, шешлек бешерәләр һәм бер минутҡа ғына иғтибарһыҙ ҡалдыралар - ут шунда уҡ ҡоро үләнгә тоҡанып та китә. Йәки кеше урман һуҡмағы буйлап атлап килә һәм тәмәке төпсөгөн ырғыта - бында ла шундай уҡ сценарий. Күптәр уйланмай ғына шешә ташлап китә. Ә ул 100 процентҡа ут тоҡандырасаҡ: ҡояш нуры уға төшөп, энергия көсәйә. Хатта балконға ҡуйылған һыулы быяла банкаһың шулай уҡ ҡояш нуры аҫтында йылынып, иҫке әйберҙәргә ут тоҡанып киткән осраҡтары була.

**Р. Абдуллин:** Йәйге селләлә машина ултырғысында шешә менән һыу ҡалдырһағыҙ, ҡояш төшөп, машина янып китеүе ихтимал. Төрлө шыйыҡсалар тултырылған аэрозолдәр күп, улар ҙа йылылыҡтан киңәйеп, шартлауы бар. Кеше уйламай, ә бәлә килә.

➔ **Хәҙер Яңы йыл байрамы етә. Ул йәй, ҡышҡа әҙерлек һымаҡ, янғын һүндереүселәр өсөн айырым бер миҙгел кеүектер. Байрам һәләкәткә әүерелмәһен өсөн ниндәй кәңәштәр булыр?**

**Р. Мөхәмәтшин:** Байрам саралары үтәсәк мәҙәниәт һарайҙарында, мәктәп-балалар баҡсаларында, шыршы ҡуйылған боҙ һарайсыҡтары, парктарҙа, Ҡыш бабайҙың Яңы йыл резиденцияһында профилактик эштәр комплексы башҡарылды, хеҙмәткәрҙәр инструктаж үткән, сигнализация, кешеләрҙе янғын тураһында иҫкәртеү системалары, эвакуация юлдары барыһы ла тикшерелде. Байрам шатлыҡтар менән килһен өсөн ябай ғына ҡағиҙәләр үтәү ҙә етә. Балаларҙы иғтибарһыҙ ҡалдырмағыҙ. Фейерверк кеүек байрам сараларын ҡағиҙәһенә ярашлы ҡулланығыҙ. Ошо мәлдә ни эшләптер бала-саға урамда петарда шартлата башлай, һатып алмағыҙ уларҙы, балағыҙға бирмәгеҙ.

**Р. Абдуллин:** Байрамды айыҡ аҡыл менән үткәргәндә генә ул хәүефһеҙ үтәсәк. Балалар өсөн дә өлкәндәр яуаплы. Иң ҙур трагедия - ул янғында балаларҙың һәләк булыуы. Шуға ла беҙ балалар араһында иҫкәртеү эштәре алып барыуға ныҡ иғтибарлыбыҙ. Балаға бер әйтһәң, ул ҡайтып әсәһен дә өйрәтәсәк әле. Шуға ла идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре ҡурсаҡ театрҙары менән балалар араһына сыға, әле лә Яңы йыл темаһына арналған спектакль мәктәптәр буйлап йөрөй. Беҙҙең һәр эшебеҙ - ул профилактика. Янғын һүндереүсенең төп эше - янғын һүндереү түгел, ә уны булдырмау. Шулай ҙа был эштә беҙгә һеҙҙең һәр кемегеҙҙең теләктәшлеге кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Тотоп биклән ҡуйыр өсөн уттың ялы ла, ҡойроғо ла юҡ. Шуға ла Яңы йыл байрамдары ла, ғөмүмән, һәр көнөбөҙ ҙә үкенестәр килтермәһен тиһәк, үҙебеҙгә лә ниндәйҙер хәүефһеҙлек сараларын күрергә кәрәклеге хаҡында ғына иҫкәртә бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙ. Күңелһеҙ статистикаға яңылары өҫтәлмәһен, ғүмерҙәр ҡыйылмаһын, утты йылылыҡ һәм ҡот, йәшәү сығанағы итеп кенә беләйек.**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА әңгәмәләште.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БӘХЕТЛЕМЕ?

"Домашний" телеканалы ике йылға бер тапҡыр тиерлек ял көндәрендә төрөктәрҙең "Гүзәл быуат" телесериалын күрһәтеп ала. Ул тәүге тапҡыр 2011-2014 йылдарҙа эфирға сыҡты. Фильм барлығы 139 серианан тора.

Донъяның күп миллион тамашасыһының һөйөүен яулаған фильмдың уңыш сере нимәлә һуң? Бында күп кенә дәлилдәр килтерергә мөмкин булыр ине. Әйтергә кәрәк, фильмды төшөрөүселәр серияны серияға тамашасының иғтибарын көсөргәнештә тотоуға өлгәшкән.

Мине, мәҫәлән, телесериал геройҙарының береһененң дә ысын мәғәнәһендә бәхетле була алмауы ныҡ аптыратты. Ни өсөн шулай һуң? Был һорауға яуап бирер өсөн Ғосман империяһы тарихына күҙ һалыу кәрәктер. Уғыҙ нәҫеленең төркмән ҡайылары нигеҙ һала был дәүләткә. Дәүләтте ҡороу ғына түгел, уны һаҡлау ҙа ҡорбандар талап итә.

Телесериал "Гүзәл быуат" тип аталһа ла, уның йөкмәткеһе тап шундай ҡорбанлыҡ хаҡында. Ундағы һәр бер персонаж солтанатта тәртип һаҡланһын өсөн үҙенең ниндәйҙер хоҡуғын, ихтыяжын, һуңғы сиратта бәхетен ҡорбан итә. Ә бит төрөктәр был дәүләтте үҙ ҡәүемен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн төҙөй. Был күҙлектән ҡарағанда, ҡорбандар аҡланған һымаҡ.

Беҙ ҙә дәүләтебеҙ именлеге хаҡына күп кенә хоҡуҡтарыбыҙҙы, ихтыяждарыбыҙҙы ҡорбан итеп йәшәйбеҙ түгелме ни?..

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



#### Селенташ мәҙәниәте ҡәбиләләре

Был бүлектә һүҙ Көньяҡ Уралдың дала өлөшөндәге (Башҡортостан, Силәбе һәм Ырымбур өлкәләре) һәм Ҡаҙағстандың йәнәш ятҡан төбәктәрендәге оригиналь, күп һанлы, әммә аҙ тикшерелгән ҡурғандар төркөмө хаҡында барасаҡ. Ҡурған өйөмдәре диаметры 7 - 14 м һәм бейеклеге 20 - 40 см тәшкил иткән ташлы япмаларҙан хасил булған. Ҡағиҙә булараҡ, ҡурғандар берәрләп, бик һирәк икешәрләп урынлашҡан. Оҙонлоғо 80 метрҙан 260 метрға тиклемге дуға рәүешле таш һыҙыҡтар ошо ҡурғандарға үҙенә күрә бер үҙенсәлек биреп тора; ошо һыҙыҡтар арҡаһында археологик әҙәбиәттә күрһәтелгән ҡурғандарҙы шартлы рәүештә "мыйыҡлы" ҡурғандар тип атайҙар.

Башҡортостанда тәүләп ошондай ике ҡурған Сибай ҡалаһынан йыраҡ булмаған Түбәнге Дәүләт ауылы янында Н.А. Мәжитов тарафынан 1965 һәм 1972 йылдарҙа тикшерелгән. Һуңынан ошондай ҡурғандарҙың Һултантимер (Йылайыр районы) һәм Байыш (Баймаҡ районы) ауылдары янында табыла.

Түбәнге Дәүләт ҡурғаны асылғандан һуң "мыйыҡлы" ҡурғандарҙы маҡсатлы рәүештә эҙләү һәм ҡаҙып тикшереү күп йылдар буйына Силәбе һәм Ырымбур өлкәләрендә, аҙаҡтан Урал һыртының көньяҡ армыттарында ҡаҙаҡ археологтары тарафынан башҡарыла. Ошондай ҡурғандарҙың дөйөм һаны хәҙер 1405-тән артып китте. Әммә "мыйыҡлы" ҡурғандарҙың төп төркөмө (300 тирәһе) Үҙәк Ҡаҙағстанда урынлашҡан һәм тасмола (тасмолинская) мәҙәниәте исеме аҫтында билдәле; ошо планда Көньяҡ Урал ҡурғандары көнбайышҡа табан йыраҡҡа сығарылған локаль төркөм булып, йәше буйынса һуңғараҡ осорға ҡарай.

Көньяҡ Уралдың "мыйыҡлы" ҡурғандарын "селенташ тибындағылар" тип атарға археолог С.Г. Боталов тәҡдим иткән. Бер аҙ үҙгәртелгән вариантта уларҙы мәҙәниәт тип хеҙмәтебеҙҙә ҡулланыу өсөн атаныҡ. Өҫтәренә таш өйөлгән ҡурғандарҙы, гәрсә "мыйыҡтар"ы булмаған хәлдә лә, селенташ мәҙәниәте ҡомартҡыларының бер төрө итеп ҡарап була, сөнки башҡа яҡтары буйынса улар тәүгеләренә бик оҡшаш. Уларҙың синхронлығына шик юҡ, тимәк, улар бер үк халыҡ төркөмө тарафынан ҡалдырылған. "Мыйыҡтар"ҙың булыу-булмауы был осраҡта, моғайын, уларҙың ижтимағи характерына бәйлелер.

10 тирәһе ҡаҙып асылған Көньяҡ Урал төркөмө ҡурғандары (селенташ тибы) материалдары уларҙың ҡайһы берҙәрендә һай ҡәберҙәргә ерләнгән (Һултантимерҙә) йә иһә ерҙең боронғо өҫтөндә ҡалдырылып күмелгән (Солончаки I, IX, Түбәнге Дәүләттә) кеше мәйеттәре булыуын күрһәтте. "Мыйыҡлы" ҡурғандарҙың Ҡаҙағстан төркөмөндә кешеләрҙе ерләү эҙҙәре байтаҡҡа күберәк. Таштар аҫтында ат, һыйыр, һарыҡ, дөйә һөйәктәре һәм ғәҙәттә ерләү инвентары тупланмаһына ингән төрлө предметтар табыла. Был миҫалдар башҡа ҡурғандарҙа ла ер өҫтөнә һалып ҡалдырылған кеше мәйеттәре булып, уларҙың быуаттар дауамында тарҡалып юҡҡа сығыуы хаҡында фараз итергә ерлек бирә. Нисек кенә булмаһын, таш өйөмө нигеҙен уның уртаһындағы тура мөйөшлө, биш йә иһә алты мөйөшлө крепида (ҡойма) хасил итеүе раҫланған. Ҡурғандың йә иһә парлы ҡурғандарҙың ҡаршы яҡтағы итәгенән яҡынса 4 - 8 м алыҫлыҡта таштарҙан яһалған дуға рәүешендәге һыҙыҡтар (линиялар) - "мыйыҡтар" ике яҡҡа табан һуҙылып китә. Һыҙыҡтарҙың икеһенең дә остары диаметры 4 метрҙан 5-6 метрға тиклемге ҙур булмаған таш түшәлгән майҙансыҡтар менән тамамлана. Уларҙың аҫтында ҙур булмаған күмер киҫәктәре, ҡыҙыу уттан ҡалған урын эҙҙәре һәм башҡа әллә ни әһәмиәте булмаған табылдыҡтар осрай.

"Мыйыҡлы" ҡурғандар һаны буйынса күп булмаған, әммә V-VIII быуаттарҙағы Көньяҡ Урал археологик мәҙәниәттәренең этномәҙәни булмышын билдәләү өсөн эталон булырлыҡ сағыу материал бирҙе. Быға яҫы төплө кувшин рәүешендәге тоҡҡалы йә иһә тоҡҡаһыҙ көршәктәр, кушнаренко тибындағы һауыт-һаба, өс ҡырлы тимер уҡ башаҡтары, билбау ҡайыштары әйберҙәре (ҡаптырмалар, беркетелеп ҡуйыла торған биҙәүестәр), эйәр биҙәүестәре һәм башҡа ҡайһы бер предметтар тура килә. Улар барыһында Көньяҡ Уралдың VI-VIII быуаттарға ҡараған ҡомартҡыларының яҡын аналогтары булыуы "мыйыҡлы" Көньяҡ Урал ҡурғандарының йәшен ошо дәүер менән билдәләргә нигеҙ бирә.

"Мыйыҡлы" ҡурғандарҙың тәғәйенләнешен археологтар әлегә асыҡлай алмаған. Уларҙың дини ерләү характерында булыуы хаҡындағы фекер киң таралған, ҡурғандар тирәләй йола ғәмәлдәре башҡарылған булыуы мөмкин. Бер "мыйыҡлы" ҡурған комплексын төҙөү өсөн колоссаль күләмдәге хеҙмәт талап ителгән - иң элгәре күп итеп таш сығарып һәм ҡурған урынына килтереп, йолаға ярашлы ҡоролма төҙөлгән.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН

## Боронғо төрки теле... тәү телгә илтә



**Әл Ҡашғари: "Ич - һәр предметтың эске өлөшө. Ыштан бауы "ич кур" тип атала, был эске билбау тигәнде аңлата. Сер "ич сүз" тип йөрөтөлә, уның мәғәнәһе - "эске һүҙ". "Ич эт" - "бауыр янындағы йомшаҡ ит".**

Боронғо төрки һүҙе "ич" хәҙерге башҡорт телендә "эс" тип әйтелә, мәҫәлән, "эс майы" - хайуандарҙың эсҡарынынан алынған май. "Ич кур" һүҙе башҡорт телендә һаҡланмаған, әммә уға мәғәнәһе яғынан "салбар бөрмәһе", "ыштан бауы" һүҙбәйләнештәре тура килә. Кешенең биле формаһы буйынса түңәрәккә оҡшаш, шулай булғас, билбау, бил ҡайыштары ла, тәнде уратып тороп, шул уҡ түңәрәк формаһын ала. Боронғо кешеләр төрлө материалдарҙан бөкләп, урап була торған һығылмалы бауҙар, ҡайыштар, ҡушаҡтар, таҫмалар етештерергә өйрәнгәс, тышҡы кейемдәрен, салбар-ыштандарын ошо әйберҙәр ярҙамында билдәренә ҡыҫып бәйләп йөрөй башлай.

Күрәһең, боронғо төрки һүҙе "кур"ҙың семантик нигеҙе әлеге "түңәрәк" мәғәнәһенә тура килгән. Беҙ был осраҡта боронғо "кур" тәү тамырын бик аҙ ғына үҙгәртелә биргән "ҡор" һүҙе менән бәйләй алабыҙ: семантик яҡтан уларҙың игеҙәк һүҙҙәр булыуына шик юҡ. Йәнә телебеҙҙә "ҡоршау" һүҙе лә бар, уның бер-береһенә яҡын булған бер нисә мәғәнәүи варианттары күҙгә салынып тора. "Ҡоршау" ҡылымы нимәнәлер уратып, ҡыҫып нығытыуҙы аңлатһа, шул уҡ һүҙ исем рәүешендә лә ҡулланыла: мискә ҡоршауы, тәгәрмәс ҡоршауы, ҡоршауҙа ҡалыу, күлдәк итәгенең ҡоршауы һ.б. Әлеге лә баяғы, ошо һүҙҙең дә семантик тамырында түңәрәк, дүңгәләк, ҡулса формаһын аңлатыусы бер үк мәғәнәүи ерлекте күҙаллап була. Шул уҡ һинд-европа телдәрендә лә "кр", "кор", "кур" тамырлы, уртаҡ мәғәнәүи ерлекле байтаҡ ҡына һүҙҙәрҙе табып була: рус телендәге круг, крепость, курень, корона, корпус һ.б.

Архаик дәүерҙәрҙә үк боронғо кешеләр балсыҡтан көршәк яһау технологияһын үҙләштергән. Көршәккә түңәрәк формаһын биреү өсөн әйләнеп тороусы көршәксе түңәрәге ҡулланылған; русса ул "гончарный круг" тип атала, бәлки, боронораҡ төрки телендә көршәк яһау ҡоролмаһы "ҡороҡ" тип тә аталғандыр. Бында "көршәк" һәм русса "горшок" һүҙҙәренең берҙәйлеге лә күҙгә бәрелеп тора. Башҡорт телендә хәҙергә тиклем ҡулланылған "ҡороҡ" һүҙе көтөүселәрҙең йылҡы малын ҡыуып тотоу өсөн эшләнгән ҡулайламаһын аңлата: ул осона ҡулса формаһындағы бау беркетелгән оҙон һайғауҙан ғибәрәт. Шулай итеп, боронғо төркиҙәрҙең "кур" тәү тамыр һүҙе, кешеләрҙең боронғо тәү телендә барлыҡҡа килеп, төрлө халыҡтар телдәрендә мәғәнәһе яғынан йоморо, түңәрәк йә иһә ҡулса формаһындағы предметтарҙың атамаларын хасил иткән.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Украинаның уң яры буйындағы һәм Көнсығыш Польшалағы алыштарҙа

### Люблин-Брест һөжүм итеү операцияһында

1944 йылдың йәйендә 23 июндән 29 авгусҡа тиклем 1-се Балтика буйы, 1-се, 2-се, 3-сө Белорус фронттары тарафынан немец фашистарының "Үҙәк" армиялар төркөмөн тар-мар итеү һәм Белоруссияны азат итеү маҡсатында "Багратион" тип аталған стратегик һөжүм итеү операцияһы уҙғарыла. Совет ғәскәрҙәре, дошман оборонаһын тарҡата һәм, 23 - 28 июндә көнбайыш йүнәлешендә 80 - 150 саҡрымға алға барып, немецтарҙың 13 дивизияһын ҡамап ала. Дошмандың "Үҙәк" армиялар төркөмө катастрофик хәлгә тарый. Гитлер командованиеһы тиҙ арала Белоруссияға үҙенең "Төньяҡ Украина" армиялар төркөмөнән танк дивизияларын, башҡа йүнәлештәрҙән өҫтәмә көстәр ебәрергә ҡарар итә. Улар совет ғәскәрҙәре ҡыҫымына эләккән 4-се армияһын да көнбайышҡа күсереүҙе тиҙләтә. Әммә был ғына фашист армияларының ҙур төркөмөн катастрофанан ҡотҡара алмай. Совет ғәскәрҙәренең дүрт фронты, һөжүм операцияһын дауам итеп, дошманға дәррәү ябырыла, һөҙөмтәлә 3 июль кисенә Минск ҡалаһы азат ителә. Ә 105 меңлек немец армиялары частары гигант "ҡаҙан"ға эләгә. 12 июлгә ҡамауға эләккән дошман төркөмө юҡ ителә: уның 70 мең һалдат һәм офицерҙары һәләк була, ә 35 меңгә яҡыны әсиргә алына. Шулай итеп, немецтарҙың ғәйрәтле тип иҫәпләнгән "Үҙәк" армиялар төркөмө 12 июлгә тулыһынса тар-мар ителә.

29 авгусҡа - операция аҙағына - дошмандың 17 дивизияһы һәм 3 бригадаһы тулыһынса юҡ ителә, ә 50 дивизияһы үҙенең составының яртыһын юғалта. Беҙҙең стратегик операция уңышлы тамамлана - немец илбаҫарҙары һәләк булғандар, яраланғандар һәм әсиргә төшкәндәр менән барыһы 500 меңгә яҡын кешеһен юғалта. Белорус ССР-ы тулыһынса азат ителә, Литва һәм Латвияның бер өлөшөнән дә дошман ҡыуып сығарыла. 20 июлдә совет ғәскәрҙәре Польша еренә аяҡ баҫа, 17 августа Көнсығыш Пруссия сиктәренә барып етә. 29 августа беҙҙең яугирҙарыбыҙ Висла йылғаһы ярҙарында алыш башлай. Фронт һыҙығының 1100 километрға еткән арауығында һөжүм итеп, улар көнбайышҡа табан 550 - 600 саҡрымға тиклем үтеп инә, бының менән улар Львов-Сандомир йүнәлешендә һәм Көнсығыш Пруссияла һөжүмде дауам итеү өсөн тейешле шарттар булдыра.

"Багратион" исеме менән нарыҡланған ҡеүәтле хәрби операция ике этапта ғәмәлгә ашырыла. 23 июндән 4 июлгә тиклем күләме яғынан бәләкәйерәк булған Витебск-Оршанск, Могилев, Бобруйск һәм Полоцк операциялары һөҙөмтәһендә дошмандың Минск төркөмөн ҡамау тамамлана. 5 июлдән 29 авгусҡа тиклем ошо йүнәлештәге фронттар бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә тағы ла 5 һөжүм итеү операцияһы - Шауляй, Вильнюс, Каунас, Белосток һәм Люблин-Брест операцияларын уҙғара.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *"Буранбай" бит иҫ китмәле, моңо менән әллә ҡайҙарға алып китә торған йыр. Былай ғына йырлап булмай уны. Унда шул хәтлем фәлсәфә, шул хәтлем тәрәнлек. Башҡорт халҡының бар аһ-зары ошо йырҙа ята.*



# ОҘОН КӨЙҘӘРЕБЕҘ

**Оҙон көйҙә - беҙҙең тарих. Халыҡтың күргән-кисергәнен, аһ-зарын, өмөтөн, фатихаһын - барыһын да халыҡ йыры үҙенә һеңдергән, һәм ул быуаттарҙан быуаттарға аманат итеп ташырыла килгән. Оҙон көйҙө һаҡлаған, халыҡҡа еткергән ижад әһелдәре үтә лә яуаплы бурыс атҡара. Заман үҙгәрә, оҙон көйгә мөнәсәбәт үҙгәрәме? Уны тәләфләмәҫ, килер быуындарға еткерер өсөн беҙ нимә эшләйбеҙ? Ғүмерҙәрен халыҡтың рухи ҡомартҡыларын һаҡлауға һәм пропагандалауға арнаған ижадсылар өсөн был һорау һәр саҡ көнүҙәк булып ҡала. Бөгөнгө һөйләшеүҙә Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, йырсы Флүрә Әхмәтша ҡыҙы КИЛДЕЙӘРОВА һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, ҡурайсы Ишморат Ҡәйүм улы ИЛБӘКОВ менән ошо һорауҙарға яуап эҙләйбеҙ.**

**Флүрә ханым, һеҙ халыҡ йырҙарын студент саҡта уҡ йырлай башлайһығыҙ. Ул ниндәй дәүер ине?**

**Ф. Килдейәрова:** Эйе, беҙҙең быуын - 50-52-се йылғылар быуыны - сәнғәт институтында уҡығанда уҡ оҙон көй менән хыялый булып йөрөнөк. Ул ваҡытта ла эстрада йырсылары күп ине, беҙ иһә үҙебеҙҙең заманды халыҡ йырҙарына иғтибарҙы йүнәлтә алған, уның матурлығын аңларға ярҙам иткән осорға әйләндерҙек, тип әйтә алам. Арҙаҡлы ҡурайсы, фольклорсы Юлай Ғәйнетдинов беҙҙең институтта факультатив дәрестәр алып бара башланы, үҙе аспирантурала уҡып та, эшләп тә йөрөй ине. Ғәли Хәмзин, Тәнзилә Үҙәнбаева һәм мин уның дәрестәренә ихлас йөрөнөк. Тағы ла шөғөлләнгәндәр булды, ләкин иң әүҙем йөрөгәндәре беҙ өсәү булдыҡ. Шул ваҡыттарҙа Башҡорт дәүләт филармонияһында Фәтих Иҡсанов төрлө йолаларҙы сәхнәләштерә башлағайны. Ғөмүмән, ул ойошторған "Йәдкәр" фольклор төркөмө ҙур эш атҡарҙы, һәм Тәнзилә Үҙәнбаева менән Ғәли Хәмзин эшләгән саҡта ул гөрләп торҙо. Үкенескә ҡаршы, ваҡыт үтеү менән төркөм дә һүнде. Әле мин атаған йырсыларға алмашҡа, һис шикһеҙ, йәш йырсыларҙы табырға булыр ине, тик художество етәкселәре был фольклор төркөмөн тергеҙеүгә илтифат бирмәне. Нисектер, еңел көй менән мауығыу китте.

**"Йәдкәр"ҙә, Ишморат, һин дә эшләнең. Был төркөмдә бер-береһен аңлаған талантлы ижадсылар тупланғайны. Шул саҡтар сәнғәтебеҙҙең бер сағыу мәле булып иҫтә ҡалған...**

**И. Илбәков:** "Йәдкәр"ҙе шул осорҙоң данлы коллективы итеүгә шулай уҡ Мәүлитбай ағай Ғәйнетдиновтың да роле ҙур булды. Уның өлкән, олпат булыуы, халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыуы тамашасыға көслө тәьҫир итә ине. Мәүлитбай ағай бер үк ваҡытта оҫта алып барыусы ла ине бит, ул төркөмөбөҙҙөң йөҙөк ҡашы булды. Сәхнәгә сыға ла: "Халыҡ йырҙары - халҡыбыҙҙың бөтмәҫ-төкәнмәҫ саф хазинаһы ул, - тип башлап ебәрә. - Халыҡ йырында халҡыбыҙҙың ниҙәр уйлағанын, ниҙәр кисергәнен белеп була. Быуаттар тарихының төпкөлдәренә төшөп китеп була. Халыҡ үҙенең хазинаһы итеп ниндәй генә йырҙарҙы һаҡлап алып ҡалмаған..." Артабан ағайыбыҙ "Урал"дың, "Зөлхизә"нең тарихын һөйләп, йырлап ебәрә.

Шунан инде йырлап-уйнап, беҙ ҙә ҡушылабыҙ. Ифрат күңелле, дәртле бер ғаилә һымаҡ ине "Йәдкәр" төркөмө, беҙ ҡайҙарҙа ғына йөрөмәнек тә, ҡайҙарҙа ғына сығыш яһаманыҡ!

**Эйе, сит илдәргә лә сыҡтығыҙ. Ғөмүмән, йырсы - ул халҡының бер илсеһе лә бит әле. Флүрә Әхмәтша ҡыҙы, һеҙҙең халыҡ йырҙарына мөкиббән китеүегеҙ нимә менән бәйле? Бәләкәй саҡтан һалынған инеме, әллә был ҡыҙыҡһыныу уҡырға килгәс башландымы?**

**Ф. Килдейәрова:** Мин Өфөгә "Йырсы булырға уҡыйым", тип килдем, ләкин вокал бүлегенә ҡабул итмәнеләр. Хордирижерлыҡта уҡып йөрөһәм дә, йыр, оҙон көй һәр саҡ күңелемдә булды. "Таштуғай", "Азамат" "Томан" һәм башҡа йырҙарыбыҙҙы гел йырлап йөрөй торғайным. Ә, ғөмүмән алғанда, мин Учалыла тыуып үҫкәнмен бит. Ҡунаҡ йыйылған саҡта, һабантуйҙарҙа әбей-бабайҙар йә шиғыр һөйләрһең, йә йырларһың, тип, мине эргәләренә ултыртып ҡуя торғайнылар. Шул саҡтарҙан миңә оҙон көй һеңеп ҡалған тип уйлайым. Бала саҡтан уҡ операға иҫем китә торғайны, радиола яңғыраһа, шуларҙы йотлоғоп тыңлай инем, Абдулла ағай әйтмешләй, ул саҡта унда шәләй-вәләй йырҙар юҡ ине.

Мәктәптә рус класында уҡыным, шуға училищеға килгәс, башҡорт теле дәрестәренә махсус йөрөнөм. Сәнғәт институтында ла булды ул дәрестәр. Академик, профессор, фольклорсы Фәнүзә Нәҙершина телевидениела "Халыҡ йыры - халыҡ тарихы" тигән тапшырыу алып барҙы. Ул үҙе лә экспедицияларға йөрөп, халыҡ йырҙарын күп йыйған ғалимә. Үҙем халыҡ йырҙарын яратҡас, фольклор кабинетына йыш йөрөнөм, унда байтаҡ йырҙарҙы яҙып алдым. Ул ваҡытта йырҙар магнит таҫмаларына яҙҙырыла ине бит, иртән торам да йәһәтләп магнитофонды ҡуя һалам. Эшемде эшләп йөрөйөм, бер ыңғайы йырҙар тыңлайым... Абдулла ағай Солтанов та әйтә торғайны бит: "Мин бала саҡта күршеләрҙең батифуны була торғайны, гел шунда барып йырсыларҙы тыңлай торғайным". Ул да шулай уҡ профессиональ йырсыларҙы тыңлап, оҙон көйҙө үҙенә һеңдергән.



Мин бер ҡасан да халыҡ йырҙарынан айырылманым. Опера театрында эшләһәм дә "Ғилмияҙаны" йыш йырлай торғайным, шуға бер мәл мине хатта "Ғилмияҙа" тип тә йөрөттөләр. Хөкүмәт кимәлендә үткәрелгән сараларға һәр саҡ саҡырылар ине, унда төрлө халыҡ йырын башҡарырға тырыштым.

**Эйе, оҙон көйгә иғтибар артыуында, уны популярлаштырыуҙа һеҙҙең хеҙмәт ҙур булды. "Халҡым йыры" музыкаль-әҙәби йыйынтығының донъя күреүе шулай уҡ ҙур ваҡиға булғайны...**

**Ф. Килдейәрова:** 1995 йылда Башҡортостанда үткән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына өс телдә - башҡорт, урыҫ, инглиз телдәрендә - йырҙың тарихы, кемдән яҙып алыныуы, йәғни тулы мәғлүмәт менән, шулай уҡ минең башҡарыуҙа диск һәм ноталары менән бергә "Халҡым йыры" тигән китап сығарҙыҡ. Ғилми яҡтан мөхәррире Фәнүзә Нәҙершина, тәржемәселәре Юрий Андриянов менән Ғәзим Шафиҡов, нотаға күсереүсе Фатима Фәизова булды. Әле һеҙ телгә алған ошо йыйынтыҡты ҡабатлап сығарһалар, бөгөн ул яңы һулыш алыр ине. Оло талант эйәһе, ысын мәғәнәһендә халыҡ йырсыһы Абдулла ағай Солтановҡа ярҙам итә алыуым менән бәхетләмен.

Үҙгәртеп ҡороу осоронда рухи ихтыяжға иғтибар көсәйгәйне. Байтаҡ филармониялар, театрҙар төҙөлдө, бик күп матур конкурстар үткәрелде. Әле бына "Ирәндек моңдары" конкурсының баһаһын бик юғары күтәрҙеләр: иң ҙур бүләк - Лада-гранта автомобиле. Быйыл был бүләккә тауышы иҫ китмәле матур, "Буранбай"ҙы шундай шәп башҡарған Нух Ҡотоев лайыҡ булды. Йырсыларҙың ҡолағын "вокал ҡолаҡ" тиҙәр. Музыканттар дөрөҫ ишетә һәм ишеткәндәрен үҙенең нервылар системаһына һеңдереп ҡалдыра. Беҙҙең бөтөн тән, һәр күҙәнәк, тотош нервылар системаһы йырлай бит ул.

Һәм тағы шуны әйткем килә: оҙон көй менән ҡурайҙы айырып ҡарарға ярамай, улар икеһе һәр саҡ бергә. Телевидениене бер йылды ҡурайға арнап, "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" тигән проект сығарғайны, ә оҙон көйҙө онотоп ҡалдырғайнылар. Улай ярамай. Улар һәр саҡ бергә яңғырарға тейеш.

*Оҙон йыр йырлайбыҙ, тип ҡайһы берәүҙәр кәрәккән урында ла, кәрәкмәгән урында ла һуҙып йырларға тырыша. Бынан моң юғала. Артығы кәрәкмәй, көй-моңдоң үҙ урынында булыуы мотлаҡ. Йырсы үҙе лә бит йырға инеп китергә тейеш. Ҡайһы бер йырсыларҙы айырым фразаға өйрәтәләр. Бер фразаны матур итеп йырлай, икенсе фразаһын да матур йырлай ала, ләкин икеһен бергә ҡуша алмай. Баштан алып аҙағына тиклем алып барып еткерер өсөн йыр бөтөнлөгөн күҙ алдына килтерергә тейешһең. Бөтөнлөк кәрәк.*

**Тәүге тәьҫораттар, халыҡ йырына һөйөү бала саҡта һалына. Ишморат, һин дә бит халыҡ йырҙарын ишетеп үҫкән быуын вәкиле.**

**И. Илбәков:** Нисәү генә икән шул бейәһе... Бына бит тел осона йыр һүҙҙәре килеп кенә тора, сөнки йырҙан көс алып йәшәгән атай балаһы мин дә. Заманаһы үҙгәреп торҙо, атайым һәр саҡ әмәлен таба торғайны. Бер заман ат тоторға рөхсәт юҡ, үгеҙ екте лә ҡуйҙы. Үгеҙгә тыйыу юҡ. Бесән тейәп, арбала ҡырын ятып йырлап ҡайтып килә. Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға ингәс: "Был йыр былай була", "Был йыр ошолай", тип өйрәтәләр бит инде, ә мин быларҙы белә инем. Атайым йоҡлар алдынан йә йырлап ята, йә сүрәләр уҡый торғайны. "Сибай"ҙы, "Шаһибәрәк"те, "Буранбай"ҙы йыш йырлағас, уларҙы отоп алғанмын, үҙемә һеңдергәнмен. Училищела "Фәлән көйҙө өйрәнәбеҙ", тип әйтеүҙәре була, мин: "Уларҙы беләм", - тип яуап бирә инем.

**Флүрә Әхмәтша ҡыҙы менән Абдулла Солтановтың "Буранбай"ҙы башҡарыуынан онотолмаҫ тәьҫораттар һаҡлана һәр кем күңелендә...**

**Ф. Килдейәрова:** "Буранбай" бит иҫ китмәле, моңо менән әллә ҡайҙарға алып китә торған йыр. Былай ғына йырлап булмай уны. Унда шул хәтлем фәлсәфә, шул хәтлем тәрәнлек. Башҡорт халҡының бар аһ-зары ошо йырҙа ята. Беҙ уны Абдулла ағай менән күп йырланыҡ. Талантлы ҡурайсы Рөстәм Шәрипов мәрхүм менән сәхнәгә сыҡҡаныбыҙ булды. Ул оҙон ҡурайҙа уйнаны. Халыҡтың ҡул сабыуы! Композитор Нур Дауытов шундай шәп оранжировка эшләгәйне.

**И. Илбәков:** Нур Дауытов халыҡ йырҙарындағы кисерештәрҙе хорға күсерә алды. Халыҡ йырҙары бит уникаль, уларҙы эшкәртеүе бик ауыр. Эшкәртәм тип, икенсе көй килеп сығыуы бар. Халыҡ йырҙарын тәрән тоя алған композитор ул Нур Дауытов. Уның "Буранбай"ҙы эшләй алыуы үҙе ҡаһарманлыҡ! Бер саҡ уның Өфө сәнғәт училищеһында юбилей кисәһе үткәйне. Шунда: "Бөтөн матур көйҙәрҙе Нур ағай яҙған икән", - тип аптырап ултырғайным. Үҙе бик баҫалҡы, ә ниндәй талант! Көслө, ҡеүәтле композитор!

**Ф. Килдейәрова:** Халыҡ көйөн эшкәртәм, тип, икенсе көйгә әйләнеп китеүе ихтимал, тинең, Ишморат. Алайыҡ "Таштуғай" йырын. Төп нөсхәһендәге "Таштуғай"ҙа өҫтә "си" юҡ, ул уртала ғына йырлана. Халыҡ йырҙарын ныҡ яҡшы белгән композитор Зәһир ағай Исмәғилев уны эшкәртеп, өҫкө нотаны индереп, ошо йырҙы мәңгеләштерҙе бит. Башҡорт халыҡ йырҙары, ғөмүмән, шул хәтлем диапазонлы. Абдулла ағай бөтөн халыҡ йырҙарын белә торғайны. Ниндәйҙен генә йырлауын һораһаҡ та, шундуҡ йырлай ҙа ебәрә торғайны. Һәр йырының тоналлеген белә, ҡурайҙа уйнап ебәрә. Ишморат, беҙ Абдулла ағайҙы алып, Башҡортостан буйлап бик күп гастролдәрҙә булдыҡ, эйеме? Тамашасының күпме йыйылыуына ҡарап тормай, бөтә ерҙә лә иҫ киткес ихлас йырлай торғайны. Шул хәтлем һағы-

✓ *Беҙҙең халыҡ йырҙарын бер фраза менән генә йырлап булмай. Икенсенән, эстәге энергетика булырға тейеш. Ә популяр йырсыларҙың энергетикаһы көслө, улар тамашасыны тауышы, моңо, энергетикаһы менән арбай.*



# АРИЯҒА ТИҢ...

нып сыға торғайны сәхнәгә. Рәттән ун йырҙы башҡара ала ине. Беҙ арып китер инде тип борсолабыҙ, ә халыҡ Абдулла ағайҙы сәхнәнән сығармай ҡул саба. Хәҙерге йырсылар бер оҙон көй йырлаһа, икенсеһендә таҡмаҡ йырларға тейешмен, тип иҫәпләй һәм яңылыша...

**Таланттар менән аралашыу, һис шикһеҙ, күңелде үҫтерә. Ләкин тормош шулай - рухи, ижади алмашыу, берберене байытыу барыбер ике яҡлы. Абдулла ағай был йәһәттән үҙенең һөнәрҙәштәренә үрнәк тә булғандыр?**

**И. Илбәков:** Эйе, күп кенә районданрҙа Абдулла ағай Солтанов менән гастролдәрҙә булырға тура килде. Минең халыҡ йырҙарын яҡшы белгәнде ул белә ине, бер саҡ миңә: "Яутүбә"не өйрәт әле", - тип мөрәжәғәт тә итте. Сығыш яһар алдынан: "Был йырҙы - оҙон ҡурайҙа, ә быныһын уртансы ҡурайҙа башҡар", - тип әйтеп ҡуя ине. "Ҡара ат"ты йырлауы миңә айырыуса оҡшай торғайны. Сыңғырлап китә тауышы, халыҡтың йөрәгенә шул тиклем үтеп инә. Шундай йырсы менән бергә сығыш яһау - үҙе ҙур бәхет.

**Ф. Килдейәрова:** Абдулла ағайҙың 85 йәше Учалы филармонияһында үтте. Учалы сәхнәһендә уның менән ҡуша йырланым да, "Абдулла ағайҙы залға төшөп тыңлайым әле", тип төшөп ултырҙым. Ул "Сибай"ҙы шул тиклем тетрәндергес итеп йырланы. Өҫкө тауыш әллә ҡайҙарға китә, уның космос ноталары йыһан төпкөлдәренә барып етә ине һымаҡ. Әле лә шул мәл иҫкә төшһә, тетрәнеп китәм. Мин опера йырсыһы булғас, башта халыҡ йырҙарын опера һымаҡыраҡ итеп башҡара инем. Абдулла ағайҙы тыңлап, уның эргәһендә йөрөп, күп нәмәгә - халыҡсан йырларға, өҫкө ноталарҙы асырға өйрәндем. Күкрәк менән, тын юлына ултыртып йырлай ине бит ул.

**Ишморат, ҡурайсы булараҡ, башҡорт тамашасыһы ғына түгел, ҡаҙаҡтар ҙа һинең ижадыңа битараф түгел. Был нимә менән бәйле?**

**И. Илбәков:** Мин Ҡаҙаҡ милли консерваторияһында уҡыған йылдарҙа ҡаҙаҡтарҙа ҡурайға иғтибар көсәйҙе. Уларҙа ҡурай бөтөнләй онотолған ине. Ә бына Ҡытайҙан, Монголиянан килгән ҡаҙаҡтар ҡурайҙа уйнай беләләр, үҙ ҡурайҙары, үҙ уйнау алымдары бар. Айырыуса Ҡытайҙан килгән ҡаҙаҡтарҙың традициялары бай. Тәлғәт Моҡошов тигән ҡаҙаҡ егете беҙҙә, Өфө сәнғәт училищеһында уҡыны. Ул думбырала, ҡурайҙа уйнай. Беҙҙең ҡурайҙа ҡаҙаҡ көйҙәрен уйнап булмай, шуға уларға ишҡурай кәрәк. Ә Тәлғәт бында ябай ҡурайҙа уйнарға өйрәнеп ҡайтҡайны. Уларҙа ишҡурайға һорау ҙурайып киткәс, мин уға ишҡурай эшләүҙең инструкцияларын һалдым.

1989 йылда тәүге тапҡыр Ҡаҙағстанға шуға иғтибар иттем: келәм өҫтөнә дүрт кеше сығып ултыра ла шулар дүрт сәғәт буйы концерт бирә. Алмаш-тилмәш йырлайҙар. Тыңлаусылар "Ауди, бәрәкалла", тип дәртләндереп ебәрәләр. Хәҙер ҡаҙаҡтар ҙа заман шауҡымына бирелеп китте, эстрада тыңлайҙар...

Мин ҡаты ауырыу кисерҙем бит инде. Шулай булһа ла ҡурайҙан айырылманым. Концерттарҙа ла сығыш яһаным. Әллә элеккесә уйнай алмайыммы, тамашасы бик ҡабул итеп бөтмәйме, тигән шикле уйҙарым да булғыланы. Бер саҡ коллегалар алдына ошо турала әйткәс, йырсы Фәдис Ғәниев: "Һин улай уйлама, Нефтекамала "Ҡара ат"ты уйнағаныңды тыңланым, халыҡ тик һиңә генә "Браво!" ҡысҡырып, аяғүрә тороп ҡул сапты. Һин концерттың үҙәгендә инең!" - тине.

Концерттарҙа элек тә шулай булды: ҡурайҙа уйнай башлаһам, үҙем дә онотолам, тамашасы ла сәхнәнән ебәрмәй ҡул саба. Күп булды бындай мәлдәр. Юбилейымды үткәргәндә сәхнәгә Азат Айытҡолов ҡотларға сыҡты ла: "Ишморатты халыҡ ярата. Ул халыҡ йырҙарын яҡшы белә. Еренә еткереп уйнай. Көслө ҡурайсы һәм эскерһеҙ ул", - тине. Ҡурайсыларҙың "Ялтырбаш Ҡәйүм ҡарт" тигән көйөмдө күмәкләп сығып уйнап, мине илатҡансы хөрмәтләүҙәре онотолорлоҡ түгел...

халыҡ йырҙарын башҡарыусылар конкурсына китергә әҙерләнгәнемдә беҙ уның менән Совет майҙанында осраштыҡ. "Хәйбулла районынан булғаның өсөн ғорурланам", тип мине ҡосаҡлап, "Еңеп ҡайт!" тип теләктәрен әйтте. Ысынлап та, унда барып, "Буранбай", "Сәлимәкәй"ҙәрҙе уйнап, еңеү менән ҡайттым. Халыҡ йырын еренә еткереп уйнаһаң, залда ниндәй халыҡ ултырһа ла аңлай, тигәйне Ишмулла ағай бер сығышында. Мин дә Мәскәүҙәге был сарала шуға төшөндөм.

**Ф. Килдейәрова:** Ишморат шундай эмоциональ башҡарыусы, тамашасыны арбап, моң эсендә биләп тота ала. Беҙҙең ҡурайсылар араһынан Ишмораттың беренсе булып урыҫ, сит ил көйҙәрен уйнай башлауы - үҙе бер ваҡиға булды бит әле.

**И. Илбәков:** Эйе, элек йәштәр Салауат Юлаев һәйкәле янындағы майҙанға бейергә сыға торғайнылар бит, унда төрлө милләт халыҡтары йөрөп ята, араларында ҡурайҙы кәмһетеп ҡарағандары ла була. Минең иһә шундай әҙәмдәргә ҡурайҙың мөмкинлектәрен танытҡым килде. Бер мәл шулай "Калинка"ны уйнап китеп бара инем, бер ҡарт килде лә: "Молодец, русские тоже любят курай", - тине.

**Шулай ҙа һәр оҫтаның үҙ сере, арбау көсө барҙыр...**

**И. Илбәков:** Һин сәхнәгә ихлас күңелдән сығаһың икән, хатта кәйефһеҙ ултырған халыҡ та шундуҡ



*Башҡорт халыҡ йырҙары, ғөмүмән, шул хәтлем диапазонлы. Абдулла ағай бөтөн халыҡ йырҙарын белә торғайны. Ниндәйен генә йырлауын һораһаҡ та, шундуҡ йырлай ҙа ебәрә торғайны. Һәр йырының тоналлеген белә, ҡурайҙа уйнап ебәрә. Ишморат, беҙ Абдулла ағайҙы алып, Башҡортостан буйлап бик күп гастролдәрҙә булдыҡ, эйеме? Тамашасының күпме йыйылыуына ҡарап тормай, бөтә ерҙә лә иҫ киткес ихлас йырлай торғайны. Шул хәтлем һағынып сыға торғайны сәхнәгә. Рәттән ун йырҙы башҡара ала ине. Беҙ арып китер инде тип борсолабыҙ, ә халыҡ Абдулла ағайҙы сәхнәнән сығармай ҡул саба. Хәҙерге йырсылар бер оҙон көй йырлаһа, икенсеһендә таҡмаҡ йырларға тейешмен, тип иҫәпләй һәм яңылыша...*

**Башҡорт дәүләт филармонияһында һин эш башлағанда унда арҙаҡлы артистар эшләй ине бит, шулаймы?**

**И. Илбәков:** Минең филармонияға эшкә килерҙе ундағы артистар алдан уҡ белгәндәр. Ишмулла Дилмөхәмәтов: "Илбәк тигән бер көслө ҡурайсы килә икән, минең яҡташ ул, Хәйбулланан", - тигән. Өлкән артистар бит кем нисек уйнай, нимәгә һәләтле икәнен тәүге нотанан уҡ асыҡлай, ә ул минең халыҡсан итеп уйнағанымды яҡын күрҙе. Мәскәүгә

йылмайып ебәрә. Флүрә апай, хәтерләйһеңме, бер ваҡыт Себер яҡтарында сығыш яһағанда һин: "Ишморат сәхнәгә сыҡҡанда уның менән ҡуша тағы ниҙер сыға", - тигәйнең. Бәлки, әлеге эскерһеҙлекте күҙ уңында тотҡанһыңдыр, белмәйем. Тик шуны беләм: халыҡ һөйөүе - ул ҙур бәхет. Ҡайһы бер артистарҙы бит хөкүмәт кенә ярата. Азат ағай әйтмешләй: "Мине хөкүмәт тә, халыҡ та ярата".

**Оҙон көй, уны һаҡлаусы, донъя кимәленә сығарыусы, халыҡты рухландырыусы, тигән саҡта күҙ алдына мәшһүр йырсы Абдулла Солтанов килеп баҫа. Халыҡ йырындай ғүмере лә оҙон булды. Быйыл 95 йәшен билдәләй алмаһа ла, йәмәғәтселек уның хөрмәтенә төрлө саралар үткәреп тора. Флүрә ханым, һеҙ уның менән яҡындан аралашҡан йырсыбыҙ. Оло шәхесте иҫләп, талант менән бергә талапсанлыҡ тураһында ла һүҙ алып барабыҙ бөгөн.**

**Ф. Килдейәрова:** Абдулла ағайҙы баш ҡалаға килтереп йырлатыу үҙе бер тарих булды ул. Өфөлә йырларға саҡырғанда: "Юлай уйнаһа ғына киләм", - тине. Абдулла Солтанов үҙе бик ябай кеше, ә эсендә уның бөйөк артист ултыра ине. Ул үҙ баһаһын белде. Йырҙар дискын сығарғанда ул Азат Айытҡоловтың уйнауын теләне. Бер килгәндә егерме йырҙы яҙҙырҙы, һәм быға режиссер үҙе лә аптыраған. Шул тиклем халыҡ йырын бер тынала яҙҙырып ҡара әле! Абдулла ағай, ғөмүмән, тәбиғәте менән кешегә бик ышанып барыусан түгел ине. Шул дискты сығарырға ярҙам иткән мәлдән алып ҡына миңә ышанды - уның тауышына мөкиббән киткәнемә, уны күрһәтергә, танытырға теләүемә ышанды. Ана шул көндәрҙән бирле Абдулла ағай менән бик дуҫлашып киттек, Аллаға шөкөр. Икенсе йылы уны йәй гастролгә алып сыҡтыҡ. Артабан да халыҡ йырына арналған һәр төрлө конкурстарҙа почетлы ҡунаҡ булып саҡырылды, һәр саҡ иғтибар үҙәгендә булды.

Ни өсөн Абдулла ағайҙың ғүмере оҙон булды? Ул бит инде әллә ниндәй уңайлы тормош шарттарында ла йәшәмәне. Абдулла ағай аш, һурпа яратты. Францияға барып ҡайттылар бит инде. "Миңә унда хатта аш та ашатманылар", - тип һөйләй. "Ни өсөн оҙон ғүмерлеһең?" - тип һорағалар: "Мин араҡы, һыра эсмәйем", - ти торғайны. Һөтләп сәй эсергә яратты. Унан бит гел оҙон көй йырланы. Тыны иркен булды. Һуҡырайғас та, гел оҙон көйҙө көйләп йөрөп, шуның менән йәшәп, үҙенең ғүмерен оҙайтты. Йырлаған кеше хистәрен тышҡа сығара, эстә ҡалдырмай. Халҡын данлап, Уралын данлап, үҙенең ғүмерен оҙайтты, Аллаға шөкөр.

**Оҙон көй башҡарыусы йәштәрҙең төп хатаһы нимәлә?**

**И. Илбәков:** Оҙон йыр йырлайбыҙ, тип ҡайһы берәүҙәр кәрәккән урында ла, кәрәкмәгән урында ла һуҙып йырларға тырыша. Бынан моң юғала. Артығы кәрәкмәй, көймондоң үҙ урынында булыуы мотлаҡ. Йырсы үҙе лә бит йырға инеп китергә тейеш. Ҡайһы бер йырсыларҙы айырым фразаға өйрәтәләр. Бер фразаны матур итеп йырлай, икенсе фразаһын да матур йырлай ала, ләкин икеһен бергә ҡуша алмай. Баштан алып аҙағына тиклем алып барып еткерер өсөн йыр бөтөнлөгөн күҙ алдына килтерергә тейешһең. Бөтөнлөк кәрәк.

**Ф. Килдейәрова:** Беҙҙең халыҡ йырҙарын бер фраза менән генә йырлап булмай. Икенсенән, эстәге энергетика булырға тейеш. Ә популяр йырсыларҙың энергетикаһы көслө, улар тамашасыны тауышы, моңо, энергетикаһы менән арбай.

**И. Илбәков:** Мәҙәниәт үҫһен өсөн йәштәрҙе үҫтерергә кәрәк. Флүрә апай хәҙер үҙе йәштәрҙе уҡыта, йәш талантарҙы күрһә, теше-тырнағы менән йәбешә. Бына шулай булырға тейеш мөнәсәбәт.

**Ф. Килдейәрова:** Хәҙер бит баҙар иҡтисады. Баҙар - ул капитал. Кем аҡса түләй, шул йырлай, шул дискылар яҙҙыра һымаҡ булып китте түгелме? Хәҙер кем генә йырламай! Әлбиттә, йырлау яҡшы, үҙең өсөн, күңел асыр, күңел баҫыр, эстәге тойғоларҙы сығарыр өсөн. Ә бына профессиональ кимәлдә йырлаған кешеләр тураһында һүҙ барғанда, мөнәсәбәт тә, талап та икенсе төрлө булырға тейеш. Ярҙам да итергә кәрәк ундайҙарға.

**Изге рухи ҡомартҡы оҙон көйҙө һаҡлап, ошо рухта яңы йәш йырсылар тәрбиәләү - оло эш. Йырсы булараҡ, үҙегеҙҙең уңыш серен нимәлә тип уйлайһығыҙ?**

**Ф. Килдейәрова:** Концерттарҙа гел генә бер йырҙы йырламаҫҡа тырыштым. Сөнки тик бер генә йырҙы йырлаһаң, ялҡыта башлай. Опера йырҙарын да, эстраданы ла йырланым, шулай ҙа йырсы булараҡ мине халыҡ йырҙары үҫтерҙе, тауышымды, күңелемде үҫтерҙе. Ә оҙон көй арияға тиң. Халыҡ йыры күңелде байыта, рухты үҫтерә. Халҡымдың ошо мондарына рәхмәтлемен.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Ҡайҙалыр уҡығайны, әллә япон, әллә ҡытай ҡыҙҙарына бала саҡтарынан уҡ бәләкәй аяҡ кейемдәре кейҙерәләр икән. Улар өсөн бәләкәй аяҡ - гүзәллек һәм камиллыҡ билдәһе.***




Әсләм һаҡ ҡына ҡалҡынды ла өй эсен байҡаны. Таң беленеп килә - ҙур тәҙрәгә яҡтылыҡ һарыла. Мөйөштәге карауатта икәү йоҡлай, уң стена буйындағы йәйелгән диванда шулай уҡ икәү булһа кәрәк. Зал уртаһындағы ҙур өҫтәлдәрҙе сығарғандар. Ҡайҙалыр сәғәт текелдәй, ихатала әтәс ҡысҡыра, эт өрөп ҡуя.

Әсләм сисенмәй ҙә ауған. Ярай ҙа эштән сыҡҡан түфлиҙарын, курткаһын сискән. Күҙҙәренә салынмай ғына нисек ысҡынырға икән? Әсләм һаҡ ҡына аяҡтарына баҫты ла, бер ҡайҙа ла ҡарамай, ишеккә йүнәлде. Бәхетенә, ул бикһеҙ ине. Эткәйне, асылды һәм Әсләм һалҡынса соланға сыҡты. Солан йәйге кухня һымағыраҡ: өҫтәл, ултырғыстар, бәләкәйерәк диван да бар, бейек һыуыҡкыс безләп ултыра. Әсләм газ плитәһе өҫтөндәге сәйнүкте шәйләне лә һемәгенән ашығып һыу эсте.

Эсендәге ут-ялҡын күпмелер баҫылғандай итте. Ишек төбөндә аяҡ кейемдәре туҙылышып ултыра. Әсләм шулар араһынан үҙенең туфлиҙарын эҙләргә кереште. Ҡараңғыраҡ булғангамы, әллә аяҡ кейеме үҙе лә танымаҫлыҡ булып үҙгәргәнгәме, һис таба алманы. Ҡабаланды, эйелеп берәм-берәм тотоп ҡарай башланы шунан. Өйҙә карауатмы, диванмы шығырҙаны, кемелер һөйләнде, бер аҙҙан кемдеңдер йөрөгәне ишетелде. Әй, ҡайһыһын булһа ла кейәйем дә ҡуяйым, тип Әсләм ҡулына эләккән резина калуштарҙы кейҙе лә, солан ишеген этте. Уныһы бикле булып сыҡты - тышҡыһын, әлбиттә, төнгөлөккә эләләр - келәне таба алмай аҙапланды. Һәрмәнә торғас тапты инде, ниңәлер бейеккә, баш тапҡырына, ҡуйғандарсы. Ишекте асып ябыуға өй ишегенең шығырҙағаны ишетелде. Болдорҙан төшөп ихатаның йәшел үләненә баҫҡас курткаһы менән рюкзагы иҫенә төштө. Кире керәйем, алайым тип берауыҡ икеләнеп баҫып торҙо. Соланға кемдер сыҡты. Юҡ, Әсләм уларға күренергә тейеш түгел, оят, киткәнме, киткән, тиерҙәр ҙә ҡуйырҙар. Курткаһы йәл, әлбиттә, рюкзагы ла бына тигән ине. Малдан бигерәк намыҫы ҡәҙерле. Һәм ул лапаҫ ышығындағы аттарҙы, иртәсел тауыҡтарҙы өркөтөп картуф баҡсаһына сыҡҡан ел ҡапҡаға ташланды.

Ҡыҫҡа тыҡрыҡтарҙы, ҡыйыш-мыйыш урамдарҙы саҡ уҙып ауыл осона аяҡ баҫҡанда, тамам яҡтырғайны. Мал-тыуарын көтөүгә ҡыуған егәрле ҡатын-ҡыҙ, теремек әбей-һәбей унын итәгенә ут ҡапҡан кеше кеүек әле тегеләй, әле былай бәрелеп йөрөүенә аптырап ҡарап ҡалды. Иртәнге һауа һалҡынса, ысыҡ төшкән. Курткаһыҙ, ҡыҫҡа еңле күлдәктә өшәнес. Сыҡҡанда бер сәйнүк һыу һемерһә лә, яңынан ауыҙы кипте. Етмәһә, урлаған калуштары бәләкәйерәк эләккән - ике аяғын да ҡыҫа. Хужаныҡын түгел, хужабикәнекен сәлдергәндер. Өсөнсө көн юлда, ә ул һаман барып етә алмай. Бынау хәйерһеҙ туйға эләкмәгән булһа, кисә кисләтеп булһа ла апаһына барып ауыр ине. Был ҡиәфәт менән хәҙер нисек күренмәк кәрәк районда? Өр-яңы салбары тамам торбаға әйләнеп, тубыҡтары сыҡҡан, хәс тә хоккейсы кейеме, ямғыр, ысыҡ һыуынан ҡыҫҡарып уҡ киткән хатта - аяғының йөҙлөгөн ҡаплап тора ине, хәҙер ана ҡайҙа күтәрелгән. Күлдәге бөтәрләнгән, керләнгән, үҙе ҡырынмаған, етек сәстәре бысраныуҙан сыра кеүек тырпайған. Ас, булған ғына аҡсаһы курткаһында ҡалды, асҡысы, паспорты рюкзагында ине... Был ҡиәфәт менән барып инһә, апаһы тамам аптырар инде. Уға үҙе менән юлда нимәләр булғанын аңлата ла алыр, ә бына судҡа барһа, иң тәүҙә паспортын һораясаҡтар. Бәй, юҡмы ни, улайһа, һин ниндәй байғош һуң, тип ҡабул да итмәҫтәр әле. Ҡағыҙһыҙ һин бер кем дә түгел шул. Эшен ҡарау урынына ҡыуып сығармаһалар...

Ауылдан сыҡҡан юл, ғәжәп, арыу ғына ине. Асфальт түгел түгеллеген, соҡорло-саҡырлы булһа ла, ҡасандыр ҡырсынташ түшәгәндәр, тимәк, юл район үҙәгенә илтә. Беҙҙә бит юл үҙәкләштереү сәйәсәтенең бер сағылышы. Район түрәләренең төпкөл ауылдарға бер ҡасан да ҡулдары етмәй, шул иҫәптән юлға ла.

Әҙәмсә юлға сығыу шатлығынан тәүҙә дәртле генә атлағайны ла, оҙаҡламай йоҡа һәм йомшаҡ табанлы калуштарҙың баҫҡан һайын таштарҙы "һанауынан" табандары зәңкей башланы, етмәһә, яман ҡыҫа. Ҡайҙалыр уҡығайны, әллә япон, әллә ҡытай ҡыҙҙарына бала саҡтарынан уҡ бәләкәй аяҡ кейемдәре кейҙерәләр икән. Улар өсөн бәләкәй аяҡ - гүзәллек һәм камиллыҡ билдәһе. Ул балалар гел генә ҡыҫынҡы аяҡ кейемендә нисек түҙҙе икән? Әсләм әле бер нисә саҡрымға түҙә алмай.

Юл ситенә сыҡты. Әммә кинәнес бында ла оҙаҡҡа һуҙылманы: юл ситенә тәгәрәгән йәки машина тәгәрмәстәре аҫтынан осҡан таштар бында ла күп ине. Онотолоп китеп шуларға баҫа ла ҡуя, баҫа ла ҡуя. Өйҙән үк уңайлыраҡты кейеп сыҡһа, бындай хәлгә төшмәҫ ине. Кисә урман эсендә күпме йонсоно, бөгөн килеп йәнә хитлана бәләкәй калуштар менән. Ай, башы етмәне, юл былай уҡ насарҙыр тип уйламаны, шул арҡала бара инде хәҙер аяҡтары бығаулы әсир кеүек. Өҫтәүенә, бармағын өйкәтеп ҡанға туҙҙырҙы. Һигеҙенсе класта военкоматҡа ҡаралырға барғанда тап ошондай ҡырсынташ юлдан барғайнылар шикелле. Ҡыш ине, әммә юл ҡарһыҙ, әлеге һымаҡ асыҡ ине.

Байтаҡ атлағас, саҡ ҡына булһа ла ял итәйем, тип, юл ситендә ауып ятҡан йыуан муйыл ағасына ултырҙы. Ултырыуы булды, уны танырға теләгәндәй, оҙаҡ текләп бер егет велосипедта үтеп китте. Әсләм тапҡырында туҡтарға ла ниәтләнгәйне шикелле, ләкин һуңғы мәл кире уйланы ла бар көсөнә педаленә баҫты. Йүнле кеше шулай таң тишегенән йөрөмәҫ, тип уйланы, ахыры. Бер аҙҙан ағас тейәгән йөк машинаһы уҙҙы. Теге көндәге урмансыларҙыр. Әсләмдең ҡул күтәреүенә ҡарамаҫтан, туҡтаманы. Мәшәҡәтләнәһе килмәгәндер - ауыр машинаны туҡтатырға, шунан ҡуҙғалтып китергә кәрәк. Ул байғоштоң әллә бар аҡсаһына, әллә юҡ аҡсаһына йонсорға ни. Ә водитель эргәһендәге ике урын да буш ине. Еңел машинала урта йәштәрҙәге ирле-ҡатынлылар үтте. Туҡтаманылар. Быларҙың да артҡы урындары буш ине. Һөйләшеп барырға ҡамасаулар, тигәндәрҙер. Бәлки, унын судҡа китеп барыуын беләләрҙер. Ундай кеше менән кемдең бергә йөрөйһө килһен? Бәләһенән баш аяҡ.

Эргәһенән байтаҡ машина үтеп, береһе лә алмағас, Әсләм артына боролоп ҡарамай ғына юлын дауам итте - ни тиклем иртәрәк барып етһә, шул тиклем яҡшыраҡ. Резина калуштарының табандары ҡыҙҙы, береһенең башы аҡтарылып сыҡты. Үҙе асыҡты, һыуһаны. Юл ситенә сығып ял итеүҙәре йышайҙы. Ә машиналар үтеп кенә торҙо, әммә уларҙың береһендә лә юл ситендә аяҡтарын саҡ алыштырып атлаған кеше ҡайғыһы юҡ ине...

Ҡояш алыҫтағы тау артына тәгәрәй. Күҙ бәйләнер алдынан шулай ҙа бер мәрхәмәтле Алла бәндәһе табылды бит. Әсләмдең юл ситендәге ҡыуаҡлыҡтар араһында төн үткәрергә ниәтләнеп, шырлыҡҡа керергә туҡталған сағы ине. Эйе, артабан атларға хәле ҡалмағайны. Алда тағы күпме бараһын белмәй. Юл буйлап, моғайын, ошо юл алып барып сығарыр әле, тип атланы ла атланы. Шунан бөгөн барыбер ҙә барып етә алмаҫын аңланы ла туҡталырға ҡарар итте. Бөтә көүҙәһе менән яй ғына боролдо машинанан төшөп үҙенә яҡынайған ике кешегә. Нишләп кабинанан сыҡтылар - аңламаны. Ғәҙәттә туҡтай ҙа ултырғанды көтөп тора бит инде водитель. Береһе, ышанысллы аҙымдар менән алдан атлағаны, ҡырҡ биш йәштәр тирәһендә генә барҙыр, эре һөйәкле, умарта кеүек йыуан, түрәләрсә тәкәббер ҡарашлы, башы тап-таҡыр итеп ҡырылған. Икенсеһе, унын артынан күндәм юрғалағаны, ҡурҡаҡ хәрәкәтле, кәүҙәгә бәләкәй, яшыҡ, бесәй ише йомшаҡ ҡына баҫып атлай.

Йыуаны Әсләм алдына килеп баҫты.

- Ҡайҙа китеп бараһың?

- Район үҙәгенә, - тип яуапланы Әсләм.

- Кис булып бөткәс унда нишләйһең?

- Кис барыу әллә тыйыламы? Бөгөн апайымдарға барып етергә ине. Иртәгә иртүк судҡа инергә кәрәк.

- Ниндәй суд? - йыуан һағайҙы, ҡаштары һелкенеп яңаҡ мускулдары тартышып ҡуйҙы.

- Булмағанды булған тип ерле юҡтан ғәйеп таҡтылар ҙа...

- Ниндәй ауылдан? Исемең кем?

Әсләм ауылының, шунан үҙенең исем-фамилияһын атаны.

- Улай икән. Аңлашылды, - тине "миһырбанлы" йыуан һуҙып ҡына. Һүҙҙәренә ниндәйҙер мәғәнә һалды, артына боролоп йәһәт кенә юлдашына, унан юлға ҡарап алды.

- Саҡырып ауылға повестка ебәргәндәр, тик мин уны алманым, автобус туҡталышы стенаһына йәбештереп киткәндәр. Шуны асыҡларға китеп барам, - тине Әсләм, үҙе һаман, былар мине алһалар ғына ярар ине, тип уйланы.

- Бөгөн барып етә алмайһың инде, - тине йыуан. - Иртәгә лә юлың уңмаясаҡ. Суд ҡарар сығарған бит инде, уны һин барыу менән генә үҙгәртмәйәсәктәр. Судтың кирегә худы юҡ. Так что барҙың ни ҙә, барманың ни. Йонсоп йөрөмә, борол, ҡайт лутсы.

- Һеҙ уны ҡайҙан беләһегеҙ? - Әсләм яуап көтөп йыуанға текәлде. - Ә минең бер ниндәй ҙә ғәйебем юҡ. Бына шуны иҫбатларға әйтәм. Минһеҙ суд нисек ҡарар сығара ул? Ғәйепһеҙ кешегә ғәйеп тағырға тейеш түгелдәр.

- Белмәйем, белмәйем, суд ғәйепһеҙ кешегә ғәйеп таҡмай ул, тимәк, бар. Повестка ла ебәргәс. Бәлки, һин повестка алып та килмәй ятҡанһыңдыр? Уныһына ла яуап тотасаҡһың әле.

- Килмәне миңә бер ниндәй ҙә повестка.

Йыуан ҡырағай ҡараш менән йәнә юлға ҡарап алды, бармаҡтары суҡмар булып йоҙроҡҡа төйнәлде. Унын Әсләмде артабан тыңлағыһы килмәгәне йөҙөнә сыҡҡайны.

- Ә минең һеҙҙе ҡайҙалыр күргәнем бар...

Әсләм һүҙен әйтеп бөтөрә алманы, йыуан әҙәм эсенә шул тиклем нык һуҡты, бындай аҫтыртын һөжүмде һис көтмәгән юлаусы дуға кеүек уртаға бөгөлдө лә төштө.

- Еҙемдә йылым менән беҙҙе тоттоғоҙ... - Хәбәренең был яғы әйтелмәне, әйтелеп өлгөрмәне, мейеһендә ялағай ялтлауы һымаҡ сағылып ҡына үтте.

Ә йыуан бәндә уртаға һынған Әсләмде юл ситендәге һыулы соҡор-канауға тибеп төшөрҙө лә йәнһеҙ кәүҙәгә бер аҙ текәлеп ҡарап торҙо, тегеһе ҡыбырламағас, лаҫҡылдата төкөрҙө, шунан, ҡабалан эре аҙымдар менән машинаһына йүнәлде.

- Суд ошоноң менән тамам, - тине ыҫылдап. - Хәҙер барып йөрөмәһәң дә була. Бара ла алмаҫһың.

Бейек йылтыр ҡара машинаның быуар йылан кеүек йыуан ҡара тәгәрмәстәре аҫтынан саң күтәрелеп, ваҡ таштар ғына атылып ҡалды...

Йөҙөнә нимәләр ҡағылыуға уянды Әсләм. Ҡағылған нәмә йылы һәм йомшаҡ ине. Хәйер, тәүҙә ах та ух килеп, өтәләнеп, йәлләү һәм аптырау ҡатыш һөйләшеү ҡолағына салынды. Эйе, кемдер кем менәндер һөйләшә, тимәк, икәүҙәр. Ҡатын-ҡыҙ тауыштары. Әллә әсәһеме? Юҡ, ул түгелдер, тауышы уныҡына оҡшамаған. Унан һуң, былар икәү. Береһе оло тауышлы, ҡалыныраҡ сыға, икенсе тауыш нәҙек, балаларса. Әсләмдең күҙен асҡыһы, тауыш хужаларын күргеһе килә. Тик нимәнәндер ҡурҡа, күҙен асһа, тауыштар юғалыр һымаҡ. Бәй, ҡайҙа ята һуң ул? Һыу эсендә түгелдер ҙә? Сөнки аяҡтары һыуҙа төҫлө һәм улар өшөй. Нишләп күҙен аса алмай? Өҙөлөп эсе ауырта, нимәһелер өҙөлгән һымаҡ, биле һыҙлай, башы геүләй.

Ҡатындарҙың береһе унын ҡулын тотто, пульсын ҡапшаны, тәне йылы, тере, тине, йөҙөнә, унан түшенә ҡағылды, иптәшенә, әйҙә, өҫкәрәк шыуҙырып һалайыҡ, аяҡтары һыуҙа ята лаһа, тине. Уны ике яҡ иңбашынан тотоп һөйрәп өҫкәрәк күсерҙеләр. Ай, эсе, ҡуҙғатҡандарында кәүҙәһенең аҫҡы яғы артта тороп ҡалды һымаҡ. Әсләм һыҙланыуҙан тештәрен ҡыҫты. Унан күҙҙәрен асҡайны: үҙенең ике яғында ике ҡатын һынын күрҙе. Икеһе лә өҫтән аҫҡа уға ҡарап баҡҡандар.

- Өләсәй, күҙен асты! - тине ҡыуанысллы бала тауышы.

- Алай ҙа, - тип яуапланы оло тауыш, шулай уҡ ҡыуанып. - Ғүмере бөтмәгән, әтеү нык ҡурҡытҡайны ла. Нишләп бында ята һуң, бына шуныһы ғәжәп, оло юл уртаһында. Машина-фәлән төкөп киткәндер инде, меҫкенде, йә йығылып ҡалғандыр.

- Әлдә килеп сыҡтыҡ! - тине бала. - Өләсәй, шулаймы?

- Эйе, шулай, бәхетенә, - тине өләсәй, - тик бына аңына килеп аяғына баҫа алһа ярай ҙа. Имгәнгәндер инде. Машинабыҙ юҡ, берәй мәрхәмәтле Алла бәндәһе генә туҡтап алып китмәһә. Балнисҡа алып бармай булмаҫтыр.

**(Дауамы. Башы 46-сы һанда).**

ИЖАДСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ИЛЬҺӨЙӘРЛЕК РУХЫН...

## кинолар ҙа тәрбиәләй

**Тормошобоҙҙо кино сәнғәтенән тыш күҙ алдына килтереүе, был һүҙ менән кемделер ғәжәпләндереүе лә ҡыйын. Шулай ҙа үҙебеҙҙә башҡортса тулы һәм ҡыҫҡа метражлы фильмдар сыға башлауы күренекле бер ваҡиға булды. Хәҙер инде туған телдә яңғыраған фильмдарҙы бармаҡ бөгөп кенә һанап сығыу ҙа мөмкин түгел. Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы сығарған фильмдар мәҙәни тормоштоң яңы битен асты, тип тә әйтә алабыҙ. Бөгөн беҙ "Башҡортостан" киностудияһы директоры Юнир ӘМИНЕВҡа өс һорау менән мөрәжәғәт иттек.**



➔ **"Башҡортостан" киностудияһының үҙ тарихы бар. Һеҙ эш башлаған осорҙан һуң байтаҡ ыңғай үҙгәрештәрҙе күрергә насип булды. Ғөмүмән, һәр йыл нимәһе менән булһа ла иҫтәлекле. Юнир Миңлебай улы, һеҙ ҙә уларҙы иҫкә алаһығыҙҙыр. Шулай уҡ быйылғы йыл тураһында әйткән саҡта, иң элек нимәне телгә алырға кәрәк?**

- Мин биш йыл элек студияға эшкә килеү менән аҡса табыу мәсьәләһен хәл итеүгә тотондом. Ул саҡта беҙҙең профессиональ камералар ҙа, объективтар ҙа юҡ ине. Ә заманса ҡорамалдарҙан тыш сифатлы кино эшләү мөмкин түгел. Шулай уҡ кинопрокатты үҫтереү йәһәтенән дә күп көс һалынды. Мин килгән саҡта беҙҙә ике-өс кенә кинозал бар ине. Хәтерләйем, "Беренсе Республика"ны төшөрҙөк тә, уны хәҙер тамашасыға тәҡдим итергә әҙерләнәбеҙ. Тик "Родина"нан башҡа бер кинотеатр ҙа прокатҡа алмай ҙа ҡуя. Сөнки ул саҡта барлыҡ кинолар Мәскәүҙән, Ҡаҙандан, Екатеринбургтан алалар ине. Кино сәнғәте телендә ул "роспись" тип атала. Бер ваҡыт Рәсәйҙең Кино фонды биш йөҙ мең халҡы булған ҡала-ҡасабаларға кино ҡоролмаһы өсөн бишәр миллион аҡса биргәнен белеп ҡалдым. Ошо мәсьәләне ыңғай хәл итеп, артабан эште дауам итеп алып киттек. Республика Башлығы Радий Хәбиров та ярҙам итте. Ҡайһы бер кинозалдар беҙҙең ҡарамаҡҡа күсте. Хәҙерге ваҡытта Башҡортостанда беҙҙең 44 кинозалыбыҙ бар. Роспиcте үҙем алып барам һәм сит ил, Рәсәй һәм үҙебеҙҙең киноларҙы ла ошо кинозалдарҙа ҡуя алабыҙ. Быйыл Мишкә, Архангел, Ейәнсура райондарында залдарыбыҙ асылды. Был ҡыуанyслы хәл. Ә инде кинозалдарыбыҙ булмаған яҡтарға беҙҙең киномобиль йөрөп тора. Экран, тауыш аппаратураһы, колонкалар, проекторҙар шул машинаға тейәлә, һәм Тимур Яҡупов Башҡортостан буйлап сығып китә.

Башҡортостан кино сәнғәтен үҫтереү - ул бөгөн бик мөһим бурыс. Кинопрокат беҙгә сәйәси яҡтан да кәрәк. Хәҙер Мәскәүгә барһам, дистрибьютерҙар ҙа минең менән икенсе төрлө һөйләшә. Элек иһә "Кемдәр ул башҡорттар?" тигән булып, йөҙ сырыштырып, аралашыуға яҡын да килмәй торғайнылар. Бөгөн инде улар: "Бына яңы фильм эшләнек, беҙҙең киноны, зинһар, алығыҙ әле", - тип үҙҙәре мөрәжәғәт итәләр. Ирешелгәндәр менән ҡәнәғәт булырға ярамай, кинопрокат ягынан әле эшләйһе эштәр бар.

"Башҡортостан" киностудияһында тулы метражлы фильмдар төшөрөү дауам итә, улар тураһында уҡыусылар хәбәрҙәр. Быйылғы яңылыҡтарға туҡталғанда, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, штурмлаусы летчик Муса Гәрәев тураһындағы йәнһүрәтте тамамлап киләбеҙ. Шулай уҡ МХО-ла һәләк булған яҡташыбыҙ Фәнис Хөсәйеновҡа арналған "Безбашенный" йәнһүрәтен эшләргә тотондоҡ. Былар барыһы ла үҫмерҙәр һәм йәштәр өсөн фәһемле булыр тип уйлайбыҙ. Ике телдә - рус һәм башҡорт телдәрендә эшләнгән "Төньяҡ амурҙары" тип аталған беҙҙең тулы метражлы анимация фильмы бөтә Рәсәй буйынса прокатҡа сыҡты. Ул ике өлөштән - русшвед һәм артабан француздар менән алышы ваҡиғаларынан тора. Балалар үҙебеҙҙең тарихты белеп үҫергә тейеш. Ул, иманым камил, илһөйәрлек рухын үҫтерәсәк.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ, республикалар, өлкәләр араһында беҙ беренселәрҙән булып үҙебеҙҙең көс менән шундай тулы метражлы йәнһүрәт төшөрҙөк. "Төньяҡ амурҙары" йәнһүрәт кенә лә түгел, беҙ уның балаларҙы йәлеп итерлек телефонда уйнай торған уйынын да эшләнек. App Store йәки Google Pay ҡушымтаһына инеп, "Төньяҡ амурҙары"н үҙеңә күсереп алырға була.

Мәғлүм булыуынса, быйыл беҙҙең Кино фонды барлыҡҡа килде һәм кино проекттары өсөн бюджеттан илле млн һум грант отоу мөмкинлеге тыуҙы. Быйыл Булат Йософов, Айнур Аҫҡаров, Гәүһәр Батталова, "Муха" студияһы грант алыуға өлгәште. Был фонд нимәһе менән һәйбәт? Ул бит Башҡортостанда кино сәнғәтен үҫтереү йәһәтенән булдырылған, тимәк, һәр йыл Башҡортостанда дүрт-биш фильм сығып торасаҡ.

➔ **Кино сәнғәте йәш быуында нисек туған телгә һөйөү уята ала?**

- Телде үҫтерер, уға һөйөү уятыр өсөн, йәнһүрәтме, анимациямы, документаль йә нәфис фильм булһынмы, беҙгә башҡортса фильмдарҙы күберәк төшөрөргә кәрәк. Оҙон һәм ҡыҫҡа метражлы фильмдарҙы шулай уҡ рус теленә лә тәржемә итергә кәрәк, сөнки төрлө кинофестивалдәрҙә, конкурстарҙа ҡатнашырға тура килә. Фильмдарҙы ил буйлап прокатҡа сығарыу бик мөһим. Урал тауҙарында урынлашҡан матур республикабыҙға килеп, башҡалар ҙа фильмдар төшөрһөндәр. Беҙ үҙебеҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе күрһәтеү маҡсатынан һәр фильмды ике телдә эшләйбеҙ. Мәҫәлән, шундайҙарҙан "Өс таған", "Беренсе республика", "Йыл ғаиләһе", "Рәми Ғарипов" - барыһы ла киң прокатҡа сыҡты. Шаймуратов тураһындағы йәнһүрәт тә башҡорт һәм рус телдәрендә буласаҡ.

➔ **Яңы йылды ниндәй пландар менән ҡаршылайһығыҙ?**

- Вилүрә Иҫәндәүләтова менән беҙ ике йыл буйы Мәскәүҙән грант алабыҙ. Былтыр "Почтальон" фильмын эшләнек. Ә быйыл "Дәрүиш" фильмы өсөн ендек. Уны ла төшөрөп, тамашасыға тәҡдим итәсәкбеҙ. Ниндәй сара ғына булмаһын, беҙ ҡатнашабыҙ, унда үҙебеҙҙең фильмдарҙы күрһәтәбеҙ. Быйыл "Китап" байрамында ла булдыҡ. Бөтәһен дә һанап тормайым, һәр хәлдә, йыл һайын үткәрелгән сараларҙың береһенән дә ситтә тороп ҡалғаныбыҙ юҡ. Халыҡ беҙҙе белә, ҡыҙыҡһына, йөрөй.

Маҡсаттарға килгәндә, "Дәрүиш" фильмын, Шаймуратов тураһындағы йәнһүрәтте төшөрөп бөтөргә кәрәк ине. "Батырҙар ташы" мистик комедияһын һәм Вилүрә Иҫәндәүләтова режиссерлығында Айгиз Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса төшөрөлгән фильмды монтажлап бөтөп, тамашасыға сығарабыҙ. Быларҙан тыш, кинозалдарҙы арттырыу буйынса эште дауам итергә кәрәк. Кинозалдарыбыҙ республиканың барлыҡ райондарында ла булырға тейеш. Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә, шулай уҡ беҙгә күрше булған сит илдәрҙә киноларыбыҙҙы күрһәтеп, үҙебеҙҙе танытып йөрөргә инде ниәтебеҙ. Беҙҙең коллектив ҙур түгел, ҡырҡ ете генә кеше эшләй. Фильм төшөрөр булһаҡ, яҡтыртыусыларҙы, инженерҙарҙы, рәссамдарҙы ситтән яллайбыҙ. Уларҙы һаҡырып, килешеү төҙөп, бына шулай команда туплайбыҙ.

Алға ҡарап эш итәбеҙ. Мәҙәниәт министрлығы ярҙамы менән Өфө сәнғәт училищеһында ике анимация курсы астыҡ. Зәһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында кино һәм телевидение курсы асырға тип һыҙланабыҙ. Режиссерҙар, монтажсылар, операторҙарҙы шунда әҙерләргә ине. Белгестәрҙе үҙебеҙҙә ҡалдырыр өсөн уларҙы бында уҡытырға кәрәк. Ни өсөн тигәндә, беҙҙән Мәскәүгә уҡырға китәләр ҙә, кире әйләнеп ҡайтмай ҙа ҡуялар. Әгәр ҙә улар Өфөлә уҡыһалар, фильмдар төшөргән ваҡытта "Башҡортостан" студияһына килеп эшләп тә йөрөрҙәр, күп нәмәгә өйрәнерҙәр ине. Үҙебеҙҙең йәштәрҙе кино сәнғәтенә йәлеп итергә кәрәк. Ошоно эшләй алһам, кино сәнғәтендә үҙемдең бурысымды үтәп бөткәнмен, тип әйтә алыр инем. Әлбиттә, идеялар күп, сер түгел, бөтөн нәмә финанслауға килеп терәлә. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ бөгөлмәйбеҙ, маҡсаттар ҡуйып, алға ҡарап йәшәйбеҙ, эшләйбеҙ, ижад итәбеҙ.

**Һорауҙарҙы Фәрзәнә ФӘТИХОВА бирҙе.**

*ӨС ДӘЛИЛ: АБВ*

## ЭСКЕЛЕК, ҺҮГЕНЕҮ - БЕР ТУҒАНДАР...




**2021 йылдың 1 февраленән социаль селтәрҙәрҙә һүгенеү һүҙҙәрен яҙыу ҡәтғи тыйылды. Ҡағиҙәне боҙоусыларға 15 тәүлектән алып 100 тәүлеккә тиклем иркенән мәхрүм итеү, штраф санкциялары ҡарала. Шул уңайҙан бер нисә фекерем:**

**А**яҙма һүгенеүҙе сикләп булыр ҙа ул, тормоштағыһынан нисек ҡотолорға? Бер кешене белә инем. Ул эсеп алһа, ауыҙынан эт ашағыһыҙ һүҙҙәр ағыла торғайны. Иҫкәрмә яһаһаң: "Үҙем түгел, телем иҫерек", - тип аҡланыр ине, йәнәһе, үҙенең бында бер ҙә ғәйебе юҡ. Һүгенеүҙән иртәгәһен дә дауам итеп: "Һүгенһәм, эсмәһәм дә баш төҙәлә", - тип көлдөрҙө. Ҡыҫҡаһы, эскелек менән һүгенеү - бер туғандар. Тимәк, эскелекте тамырынан ҡоротмайынса, һүгенеүселәрҙең дә ауыҙын ябыу мөмкин түгелдер.

**Б**ашҡорт теленән "файмат"тан башлап "яп-яланаяҡ"ҡа тиклем күп кенә һүгенеү һүҙҙәре урыҫ теленән тәржемә ителгән калькалар. Беҙ бала саҡта өлкәндәр һүгенеү һүҙҙәрен ҡулланмайынса ла, тәртип боҙоусыны әрләп, ҡаты ғына итеп әйтеп, ағыулы ҡа улырта торғайнылар. Был осраҡта асыл маҡсаты аҡлай. Ундай һүҙҙәр: төртөнгөр, ҡоромағыр, ауыҙыңа май, телеңде тилсәр саҡҡыры, кишер сәйнәмә, атаң ҡошап, әсәң ҡошап, ҡатыраҡтары - ер кинәнгер, бүре ерәнгер һ.б.

**В**ауыҙынан эт ашағыһыҙ һүҙҙәр ысҡындырыусыларҙы был алама ғәҙәтенән арындырыу өсөн уны оятлы итеү маҡсатҡа ярашлылыр. Бының өсөн һүгенеүҙе "Тел зинаһы"на тиңләргә лә кәрәктер. Ә башҡалар нисек уйлай?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

**Былтыр Ғафури районының Оло Үтәш ауылы "Айыҡ ауыл" республика конкурсында әүҙем ҡатнашып, маҡтаулы урынға лайыҡ булғайны. Быйыл иһә күптән инде бай йөкмәткеле спорт, рухи-мәҙәни саралар үткәреүе менән дан алған Яугилде ауылы, муниципаль этабында еңеү яулап, республика кимәленә сыҡты.**

# СӘЛӘМӘТ ЙӘШӘҮ - ҠАНЫБЫҘҘА



## Ағинәйҙәр башлап йөрөй

Яугилде ағинәйҙәре ауылыбыҙҙың ғына түгел, тотош райондың күрке булып тора, тиһәк, һис тә арттырыу булмаç. Һуңғы йылдарҙа улар ойошторған һәм ҡатнашҡан сараларҙың барыһын да бөләкәй мәҡәләлә һанап сығыу мөмкин түгел. Р.Ә.Зәйнетдинова етәкселек иткән ағинәйҙәрҙең йәш быуынға тәрбиә биреү юҫығында үткәргән төрлө йола байрамдары, оҫталыҡ дәрестәре һәм башҡа изге эштәре оло баһаға лайыҡ.

Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан ир-егеттәргә матди ярҙам ойоштороуҙы улар үҙҙәренең мөҡәддәс бурысы тип һанай. Боҙолмай торған ризыҡ, кейем-һалым туплау, ойоҡбаш бәйләү, окоп шәмдәре әҙерләү кеүек мөһим эштә уларҙың тырышлығы арҡаһында ауыл халҡы ҙур теләк менән ҡатнаша. Иң мөһиме - илебеҙ мәнфәғәтен яҡлаған ир-егеттәребеҙ еңеү менән иҫән-һау әйләнеп ҡайтһын, тип улар әленән-әле доға ҡылып тора.

Мәктәп-мәҙәни усағыбыҙға район ағинәйҙәре лә тәжрибә тупларға килеп тора. Рәзилә Солтанморатова, Шәйҙә Ғәлиәхмәтова кеүек ҡул эштәре оҫталары улар өсөн махсус дәрестәр үткәрә, халыҡ араһында аңлатыу эше алып барыу алымдары тураһында фекер алышыу ойошторола. Яңыраҡ ауылыбыҙ ағинәйҙәре Стәрлебаш районында уҙғарылған IX төбәк-ара "Иман нуры" фестиваль-конкурсында уңышлы сығыш яһап ҡайтты. Хәйер, район үҙәгендә һәм Өфө ҡалаһында үткәрелгән мәҙәни сараларға ла уларҙы даими саҡырып торалар. Һәр ҡайҙа киң таралған скандинав таяғы менән саф һауала йөрөү буйынса ла ағинәйҙәр өлгө күрһәтә. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тиҙәр бит.

Ҡыҫҡаһы, хаҡлы ялдағы абруйлы апай-инәйҙәр - ауылдың рухи терәге, йәш быуындың тәрбиәселәре һәм остаздары.

## Ғаиләләр волейбол уйнай

2008 йылда Рәсәйҙә Ғаилә йылы иғлан ителгәс, районда ғына түгел, хатта республикала тәүгеләрҙән булып күренекле ауылдашыбыҙ Н.Б. Сәлимов инициативаһы менән Яугилделә өр-яңы проект ғәмәлгә ашырыла башланы. Бурлы ауыл биләмәһе ауылдарында йәшәгән ғаиләләр командалары араһында даими уҙғарылған "Яугилде кубогы" өсөн волейбол бәйгеһе ҙур популярлыҡ яуланы. Был турнирға күрше ауыл биләмәләренән дә ҡунаҡ командаларҙың килеүе ярыштың абруйы тураһында асыҡ һөйләй.

Бәйгелә ҡатнашҡан олатай, атай, ейән йәки ейәнсәрҙәрҙән торған командалар һәр ваҡыт һоҡланыу тыуҙыра. Йәш быуында спортҡа һөйөү тәрбиәләүҙә атай-олатайҙарҙың үрнәге баһалап бөткөһөҙ: юҡҡа ғына, атанан күргән уҡ юнған, алма ағасынан йыраҡ төшмәй, тимәйҙәр бит. Төрлө быуын вәкилдәренән торған Абдуллиндар, Зәйнуллиндар, Солтанморатовтар, Ғәлиәхмәтовтар ғаиләләре "Яугилде кубогы" өсөн сәмле ярышта һәр ваҡыт ихлас көс һынаша. Ә инде быйыл апрель айында 15-се тапҡыр ойошторолған юбилей бәйгеһе район кимәленә күтәрелде. Унда йәмғеһе 12 ғаилә командаһы ҡатнашты. Көсөргәнешле бәйгелә Зәйнуллиндар ғаиләһе иң көслө команда тип танылды.

Йылдың-йылы волейбол ярышы бағыусылар ярҙамында ойоштороla. Бурлы ауыл биләмәһе хакимиәте, "Уңыш" йәмғиәте (етәксеһе - Н.М. Хисаметдинов), Бурлы һәм Яугилде мәктәптәре, ауылдаштарыбыҙ - эшҡыуар Р.Ғ. Солтанморатов һәм Сәлимовтар, Солтанморатовтар ғаиләләре аш-һыу, призлар, дипломдар хәстәрләүҙә ҙур ярҙам күрһәтә.

## Мәсет тә тәрбиә үҙәге

Тыуған ауылында иман йорто төҙөтөү ниәте менән янған Ниязбай Булатбай улы 2010 йылда мәсет ҡалҡасаҡ урынға фатиха бирҙертеү өсөн Башҡортостандың Диниә назараты рәйесе, мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллинды алып ҡайтты. Олуғ дин әһеле мәсет урын аласаҡ бәрәкәтле ергә аят бағышлап, Аллаһ йортоноң оҙаҡ йылдар тирә-яҡҡа иман нуры таратып тороуын теләне. Аллаһ ярҙамы менән ауыл халҡы һәм ситтә йәшәгән ауылдаштар иман йортон дүрт йыл эсендә төҙөп тә ҡуйҙы. 2014 йылдың 23 авгусында мәсетте асыу айҡанлы "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы уҙғарылды. Туғыҙ йыл эсендә ауыл мәсете лә ысын мәғәнәһендә тәрбиә үҙәгенә әйләнде: Нәғим хәҙрәт Дәүләтбаев дини йолаларҙы атҡарыуҙа ныҡышмалы эшләй: йома намаҙҙары даими үткәрелә, Ураҙа, Ҡорбан байрамдары тотош ауыл байрамына әүерелде, балаларға дини ғилем биреү яйға һалынған. Киләһе йыл ауылыбыҙға ҡот биреп торған, иман нуры тараткан Аллаһ йортоноң 10 йыллыҡ юбилейын район имамдары һәм йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашлығында үткәреү күҙҙә тотола.

Ҡыҫҡаһы, Яугилде халҡы сәләмәт йәшәү рәүеше менән башҡа ауылдарға лә матур үрнәк күрһәтә. Яңы ғына ауылда республика кимәлендә "Ҡаҙ өмәһе" байрамы, мендәрҙәр конкурсы һәм Рәсәй Геройы Фәрүәт Яҡупов иҫтәлегенә милли көрәш буйынса ярыш үтеүе ошо хаҡта асыҡ һөйләй.

**Байыҡ БУЛАТОВ.**
**Ғафури районы.**





Был тәңгәлдә унең борсолорға урыны юҡ - кесе улы Вадимға ат егеү кәрәк-яраҡтарын эшләү нескәлектәрен өйрәткән. Ваҡыты булғанда улы һәр саҡ атаһы янында.

Оҫта һөйләүенсә, ябай нуҡтаны яһауға 2 сәғәт тирәһе ваҡыт кәрәкһә, ышлыя, йүгән, дилбегә, ыңғырсаҡтары һәм башҡа кәрәк-яраҡтары булған тулы комплект эшләүгә байтаҡ ваҡыт кәрәк. Тирене тигеҙ итеп ҡырҡыу, дегет менән буяу ғына ла бик мәшәҡәтле. Ә Кәрим ағай ижади кеше булараҡ, уларҙы биҙәүгә лә етди иғтибар бүлә. Уларҙы баҡыр, ҡалай сөй һәм сигә менән биҙәү өсөн махсус станок һатып алған. Төрлө кимәлдә үткәрелгән күргәҙмәләрҙә, халыҡ кәсептәре байрамдарында, бигерәк тә "Башҡорт аты" фестивалендә унең эшләгән ат егеү кәрәк-яраҡтарына һоҡланмаған кеше һирәктер. Һатып алырға ла килешәләр, бүләккә лә һайлайҙар. Унең тауары Учалы районынан тыш, Әбйәлилдә һорау менән файҙалана. Башҡа төбәктәрҙән дә заказ бирәләр.

Эйе, эшһеҙ тормай оҫта. Ҡулы эш белгән кеше ауылда ла матур итеп йәшәй. Кәрим ағай Мостафин башҡорт халҡының ат егеү кәрәк-яраҡтарын яһау традицияларын да һаҡлай, яраҡкан шөғөлө килем дә килтерә.

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Дүртенсе дошман: инаныуҙар

Беҙ һәр төрлө ҡараш бер үк кимәлдә дөрөҫ булған сағыштырма Ғаләмдә йәшәйбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, инандырыу - икенсе кешегә үҙеңдең ҡарашыңды көсләп тағырға тырышыу ул. Бары тик үҙенә ышанмаған кеше генә бәхәс ваҡытында башҡаларҙан ярҙам эҙләй. Ышандырырлыҡ дәлилдәрҙе компенсациялаған ситтән ярҙам бары тик үҙен ышанысты тоймаған кешегә генә кәрәк. Беҙҙең менән нимә генә булһа ла - үҙебеҙ ғәйепле. Үҙебеҙ һәм башҡа бер кем дә түгел. Башҡаларҙы үҙегеҙҙең уңышһыҙлыҡтарығыҙҙа ғәйепләй башлаһағыҙ, был тормошта бер нәмәгә лә өлгәшә алмаясаҡһығыҙ. Яуаплылыҡты үҙегеҙҙең иңегеҙҙән алып, башҡа икенсе кешегә һалырға тырышһағыҙ, һеҙ уға үҙегеҙҙең көсөгөҙҙө генә түгел, ә азатлығығыҙҙы ла бирәһегеҙ. Алдағы бер нисә көндә шундай тәжрибә үткәреп ҡарағыҙ: үҙ фекерегеҙҙе нисә тапҡыр яҡларға тырышыуығыҙҙы һанап барығыҙ. Һөҙөмтәләр аптыратыр. Шуны хәтерегеҙгә һалып ҡуйығыҙ - бәхәскә ингән һайын һеҙ бер файҙаһыҙға энергия сарыф итәһегеҙ һәм халыҡ алдында үҙегеҙгә ышанмауығыҙҙы күрһәтәһегеҙ.

## Ғаилә проблемалары

Иң күп бәхәстәр ғаиләлә сыға. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, ғаилә - ул партнерҙар бербереһенә аҡылһыҙ вәғәҙәләр биргән урын.

## Бәйлелек

Айырылышыуҙарҙың күплеге парҙарҙың уңыш ҡағиҙәләрен һәм ҡанундарын бөтөнләй белмәүен күрһәтә. Мәҫәлән, партнерҙарҙың береһе икенсеһенә мохтаж икән, проблемалар тыуыу ихтималлығы ла юғары, сөнки һеҙ партнерығыҙға мохтаж, ул һеҙгә бәхетле булыу өсөн кәрәк. Һеҙ уға билдәле бер өмөттәрегеҙҙе бағлайһығыҙ. Проблема шунда ла инде. Әгәр ошо өмөттәрегеҙ аҡланмаһа, күңелегеҙ ҡайта, хатта шок кисерәһегеҙ. Әгәр бер нәмәгә лә өмөтләнмәһәгеҙ, бер ҡасан да күңелегеҙ ҡайтмаясаҡ. Быны эшләүе ауыр, әммә мөмкин.

Кешене, уға мохтажлығығыҙ булмағанда ғына, ысынлап яратырға мөмкин. Бына нимә ул шартһыҙ мөхәббәт - мөнәсәбәттәрегеҙ бер ниндәй шарт менән бәйләнмәгән, һеҙ бер нәмәгә лә өмөтләнмәйһегеҙ.

Партнерығыҙға бәйле булырға телмәүегеҙ бөтөнләй ситтән эш табырға кәрәк тигәнде аңлатмай. Был бары тик, әгәр ир менән ҡатындың береһе үҙ ирке менән өй эштәрен башҡара икән, ул иренең йәки ҡатынының килеменең бер өлөшөн эш хаҡы итеп алырға тейеш, тигәнде аңлата. Быға һеҙ һөйләшеп-килешеү аша килергә тейешһегеҙ.

Банктағы иҫәбегеҙ бергә түгел, айырым булһын! Бик күп ғаиләләрҙә низағтар бик йыш аҡса һәм секс арҡаһында килеп тыуа. Аҡса мәсьәләһен бергә йәшәгәндәге бурыстарҙы айырып, һәр партнерҙың финанс бойондороҡһоҙлоғон һәм азатлығын тәьмин итеп көйләргә була. Ә бына сексҡа килгәндә...

**Пьер МОРАНСИ.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Былтыр Ғафури районының Оло Үтәш ауылы "Айыҡ ауыл" республика конкурсында әүҙем ҡатнашып, маҡтаулы урынға лайыҡ булғайны. Быйыл иһә күптән инде бай йөкмәткеле спорт, рухи-мәҙәни саралар үткәреүе менән дан алған Яугилде ауылы, муниципаль этабында еңеү яулап, республика кимәленә сыҡты.**

# СӘЛӘМӘТ ЙӘШӘҮ - ҠАНЫБЫҘҘА



## Ағинәйҙәр башлап йөрөй

Яугилде ағинәйҙәре ауылыбыҙҙың ғына түгел, тотош райондың күрке булып тора, тиһәк, һис тә арттырыу булмаç. Һуңғы йылдарҙа улар ойошторған һәм ҡатнашҡан сараларҙың барыһын да бөләкәй мәҡәләлә һанап сығыу мөмкин түгел. Р.Ә.Зәйнетдинова етәкселек иткән ағинәйҙәрҙең йәш быуынға тәрбиә биреү юçығында үткәргән төрлө йола байрамдары, оçталыҡ дәрестәре һәм башҡа изге эштәре оло баһаға лайыҡ.

Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан ир-егеттәргә матди ярҙам ойоштороуҙы улар үҙҙәренең мөҡәддәс бурысы тип һанай. Боҙолмай торған ризыҡ, кейем-һалым туплау, ойоҡбаш бәйләү, окоп шәмдәре әҙерләү кеүек мөһим эштә уларҙың тырышлығы арҡаһында ауыл халҡы ҙур теләк менән ҡатнаша. Иң мөһиме - илебеҙ мәнфәғәтен яҡлаған ир-егеттәребеҙ еңеү менән иçән-һау әйләнеп ҡайтһын, тип улар әленән-әле доға ҡылып тора.

Мәктәп-мәҙәни усағыбыҙға район ағинәйҙәре лә тәжрибә тупларға килеп тора. Рәзилә Солтанморатова, Шәйҙә Ғәлиәхмәтова кеүек ҡул эштәре оçталары улар өсөн махсус дәрестәр үткәрә, халыҡ араһында аңлатыу эше алып барыу алымдары тураһында фекер алышыу ойоштороло. Яңыраҡ ауылыбыҙ ағинәйҙәре Стәрлебаш районында уҙғарылған IX төбәк-ара "Иман нуры" фестиваль-конкурсында уңышлы сығыш яһап ҡайтты. Хәйер, район үҙәгендә һәм Өфө ҡалаһында үткәрелгән мәҙәни сараларға ла уларҙы даими саҡырып торалар. Һәр ҡайҙа киң таралған скандинав таяғы менән саф һауала йөрөү буйынса ла ағинәйҙәр өлгө күрһәтә. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тиҙәр бит.

Ҡыçҡаһы, хаҡлы ялдағы абруйлы апай-инәйҙәр - ауылдың рухи терәге, йәш быуындың тәрбиәселәре һәм оçтаздары.

## Ғаиләләр волейбол уйнай

2008 йылда Рәсәйҙә Ғаилә йылы иғлан ителгәс, районда ғына түгел, хатта республикала тәүгеләрҙән булып күренекле ауылдашыбыҙ Н.Б. Сәлимов инициативаһы менән Яугилделә өр-яңы проект ғәмәлгә ашырыла башланы. Бурлы ауыл биләмәһе ауылдарында йәшәгән ғаиләләр командалары араһында даими уҙғарылған "Яугилде кубогы" өсөн волейбол бәйгеһе ҙур популярлыҡ яуланы. Был турнирға күрше ауыл биләмәләренән дә ҡунаҡ командаларҙың килеүе ярыштың абруйы тураһында асыҡ һөйләй.

Бәйгелә ҡатнашҡан олатай, атай, ейән йәки ейәнсәрҙәрҙән торған командалар һәр ваҡыт һоҡланыу тыуҙыра. Йәш быуында спортҡа һөйөү тәрбиәләүҙә атай-олатайҙарҙың үрнәге баһалап бөткөһөҙ: юҡҡа ғына, атанан күргән уҡ юнған, алма ағасынан йыраҡ төшмәй, тимәйҙәр бит. Төрлө быуын вәкилдәренән торған Абдуллиндар, Зәйнуллиндар, Солтанморатовтар, Ғәлиәхмәтовтар ғаиләләре "Яугилде кубогы" өсөн сәмле ярышта һәр ваҡыт ихлас көс һынаша. Ә инде быйыл апрель айында 15-се тапҡыр ойошторолған юбилей бәйгеһе район кимәленә күтәрелде. Унда йәмғеһе 12 ғаилә командаһы ҡатнашты. Көсөргәнешле бәйгелә Зәйнуллиндар ғаиләһе иң көслө команда тип танылды.

Йылдың-йылы волейбол ярышы бағыусылар ярҙамында ойоштороло. Бурлы ауыл биләмәһе хакимиәте, "Уңыш" йәмғиәте (етәксеһе - Н.М. Хисаметдинов), Бурлы һәм Яугилде мәктәптәре, ауылдаштарыбыҙ - эшҡыуар Р.Ғ. Солтанморатов һәм Сәлимовтар, Солтанморатовтар ғаиләләре аш-һыу, призлар, дипломдар хәстәрләүҙә ҙур ярҙам күрһәтә.

## Мәсет тә тәрбиә үҙәге

Тыуған ауылында иман йорто төҙөтөү ниәте менән янған Ниязбай Булатбай улы 2010 йылда мәсет ҡалҡасаҡ урынға фатиха бирҙертеү өсөн Башҡортостандың Диниә назараты рәйесе, мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллинды алып ҡайтты. Олуғ дин әһеле мәсет урын аласаҡ бәрәкәтле ергә аят бағышлап, Аллаһ йортоноң оҙаҡ йылдар тирә-яҡҡа иман нуры таратып тороуын теләне. Аллаһ ярҙамы менән ауыл халҡы һәм ситтә йәшәгән ауылдаштар иман йортон дүрт йыл эсендә төҙөп тә ҡуйҙы. 2014 йылдың 23 авгусында мәсетте асыу айҡанлы "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы уҙғарылды. Туғыҙ йыл эсендә ауыл мәсете лә ысын мәғәнәһендә тәрбиә үҙәгенә әйләнде: Нәғим хәҙрәт Дәүләтбаев дини йолаларҙы атҡарыуҙа ныҡышмалы эшләй: йома намаҙҙары даими үткәрелә, Ураҙа, Ҡорбан байрамдары тотош ауыл байрамына әүерелде, балаларға дини ғилем биреү яйға һалынған. Киләһе йыл ауылыбыҙға ҡот биреп торған, иман нуры таратҡан Аллаһ йортоноң 10 йыллыҡ юбилейын район имамдары һәм йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашлығында үткәреү күҙҙә тотола.

Ҡыçҡаһы, Яугилде халҡы сәләмәт йәшәү рәүеше менән башҡа ауылдарға лә матур үрнәк күрһәтә. Яңы ғына ауылда республика кимәлендә "Ҡаҙ өмәһе" байрамы, мендәрҙәр конкурсы һәм Рәсәй Геройы Фәрүәт Яҡупов иçтәлегенә милли көрәш буйынса ярыш үтеүе ошо хаҡта асыҡ һөйләй.

**Байыҡ БУЛАТОВ.**
**Ғафури районы.**





